ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

4-10 июль (майай) 2015

№27 (653)

ЗОЛОТОЙ ФОНД ПРЕССЫ 2015

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Балалар еңеүе



5

Ҡытай стенаһын кем төҙөгән?



6-7

Мәктәптәр генә түгел, "Йәйләү" программаһы ла илһөйәрлек тәрбиәләй балаларҙа



11

Кешеләрҙе диндән дүндермәйек!



13

ТВ-программа 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Һеҙҙең арала 2015 йылдың икенсе ярты йыллығы өсөн "Киске Өфө" (индексы: 50665) гәзитенә яҙылырға онотҡандар барҙыр, моғайын. Хәлде төҙәтергә мөмкин: июлдең 17-һенә тиклем яҙылып, яратҡан баҫмағыҙҙы августан уҡый башлай алаһығыҙ. Гәзиткә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәрһәгеҙ, кемдәргәлер бүләккә матур китаптар ебәреп ҡыуандырыу ниәтебеҙ ҙә бар. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!***

*ҺҮҘ - ҠАЛА БАШЛЫҒЫНА*

# "ӨФӨ... ҮҘЕНӘ ОҠШАҒАН. Ә БЫЛ ИҢ МӨҺИМЕ!"



**Ниндәйҙер берҙәм, дөйөм генә өфөлө образы барыбер юҡтыр, тип уйлайым. Өфөнөң көньяҡ, тарихи өлөшө - бында, әлбиттә, бөтөнләй икенсе характер. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Одессанан, Ленинградтан, Мәскәүҙән, Киевтан эвакуацияланған зыялыларҙың күпселеге ошонда ҡалып, кире ҡайтмай, үҙҙәренең ҡеүәте, белеме, таланты менән ижади, мәҙәни мөхитте байыта. Әлбиттә, бындағы өфөлө бөтөнләй башҡа. Шуға күрә, һәр районды, урындағы халыҡтың менталитеты тураһында оҙаҡ һөйләргә мөмкин. Әммә өфөләрҙең төп һыҙаты - эшһөйәрлек һәм изгелеклелек. Өфөләр Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында йәшәүселәр кеүек бик йыш йылмаймайҙар ҙа, ләкин улар менән һөйләшә башлаһаң һәм уларҙың ышанысын яулаһаң, уларҙың күңеле тулы изгелек икәнен бик тиҙ күрәһең. Мин тағы ла бер һыҙатты билдәләр инем: өфөләр бөтөн нәмәне аныҡ эш буйынса баһалай. Халыҡсан итеп әйткәндә, уны буш һүҙ менән генә түйҙырып булмай. Ялтырауыҡлы белдереүҙәр, лозунгылар менән башын ҡатырырмын, тимә. Әгәр ул үҙ территорияһында саҡ ҡына яҡшы яҡҡа үҙгәреш күрһә лә урындағы үҙидара органдарына ышана.**

(Әңгәмәне 8-9-сы биттәрҙә уҡығыҙ).

*БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ*

**Баш ҡаланың Ленин урамында урынлашҡан Театр скверында "Ете ҡыҙ" фонтаны эшләй башланы. Яңы мәҙәни объектты асыу тантанаһында Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ҡатнашты. Башҡорт халҡының билдәле легендаһынан һәм Ф.Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле ҡуйған бейеүҙән илһам алып эшләнгән музыкаль фонтандың авторы С.Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты, БР-ҙың атҡаҙанған рәссамы, Рәсәй рәссамдары союзы ағзаһы Хәниф Хәбибрахманов.**

# ЕТЕ ҠЫҘ...

## фонтан урғылта



(Дауамы 5-се биттә).

12+

✓ *Илебеҙҙең, әгәр рациональ файҙаланғанда, үҫтергәндә, ҡеүәте ҙур, Ҡытай кеүек империя менән бер ойошмала булып, бер төптән эшләүе уны яңы офоҡтарға алып сығыуы ихтимал.*



БЫЛ АЙҘА...

# ҠЫҘЫУ ЭШ МӘЛЕ ЛӘ

**Йәй уртаһы - июль дә башланып китте, иншалла. Хәйерле көндәр, матур ял, сәләмәтлек һеҙгә, гәзит уҡыусыларыбыҙ. Дөрөҫ, ял ғына түгел, ҡыҙыу йәйге эш мәле лә бит был осор. Шулай ҙа ял сәғәттәрендә гәзитебеҙгә күҙ һалып алырға форсатығыҙ тейер, тип ышанабыҙ. Сөнки донъянан артта ҡалмайым, тиғән кешегә "Киске Өфө"нө уҡыу ҙа етә. Әйткәндәй, донъяла ниҙәр бар һуң - әйҙәгеҙ, иҫтәлекле көндәр һәм даталар календарына күҙ һалайыҡ.**

Ай башында, йәғни **2 июлдә**, Башҡортостанда идара итеүҙең кантон системаһы бөтөрөлөп, башҡорттарҙы хәрбилектән граждандыҡ сословиеһына күсереү тураһында положениеның сығыуына - 150 йыл.



Ошо уҡ көндө яҙыусы һәм журналист, II дәрәжә Ватан һуғышы ордены кавалеры Сәләх Кулибайҙың тыуыуына 105 йыл. Был ҡояшлы йәйге көндө халыҡ шағиры, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Абдулхаҡ Игебаев 85 йәшен билдәләне. Ә бына **7 июлдә** Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, Халыҡтар дуҫлығы һәм Ҡыҙыл Йондоҙ ордендары кавалеры, яҙыусы Хәниф Кәримдең тыуыуына 105 йыл тула.

**8 июлдә** Рәсәй халҡы күңелгә яҡтылыҡ һирпкән нур булырҙай матур бер көндө билдәләйәсәк. Ул - Бөтөн Рәсәй ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө. Тормошобоҙ тап ана шул тулҡында бәүелһен өсөн, мәғлүм ки, ерҙә тыныслыҡ үә хеҙмәттәшлек кәрәк. Тап ана шул көн баш ҡалабыҙ Өфөлә күптән көтөлгән оло, абруйлы форум - Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы ағзалары булған дәүләт башлыҡтары Советы ултырышы һәм БРИКС дәүләттәре һәм хөкүмәттәре башлыҡтарының осрашыуы башлана. Донъяларыбыҙ - имен, күгебеҙ аяҙ булһын, планетабыҙ халыҡтары дуҫлыҡта, шатлыҡта, бәрәкәттә көн итһен, тип тырыша был илдәрҙең етәкселәре. Хәйерле сәғәттә, тип теләйек уларға!

Изге эштәребеҙҙең изге көндәргә тап килеүе күңелдә уғата матур өмөттәр уята. **12 июлдең** - Ҡәҙер кисе, **17 июль** - Ураҙа ғәйете икәнлеген һәр кемебеҙ хәтерҙә тотоп, ошо көндәрҙә генә түгел, көн дә фарыҙ булған изге ғәмәлдәр атҡарыуҙан яҙлыҡмайыҡ, тип өндәшке килә милләттәштәргә.

**12 июлдә** Бөтөн Рәсәй почта көнө билдәләнә. Тормошобоҙ ни тиклем күҙ эйәрмәҫ тиҙлектә елдермәһен, почта хеҙмәтенә мохтажлыҡ кәмемәй. Айырыуса гәзит сығарыусы матбуғаттың ышаныслы партнерына әйләнһен ине ул почта, тип теләгә килә был көндә.

Юбилейҙары йәмле йәй уртаһына тап килгән илһөйәр шәхестәребеҙҙе барлап китәйек, булмаһа. **18 июль** - Башҡортостандың атҡаҙанған сәнғәт эшмәкәре Салауат Итбаевҡа 70 йәш; **20 июль** - халыҡ шағиры Мәжит Ғафуриҙың тыуыуына 135 йыл, Өфө аэропорты авиатехнигы, СССР аэрофлоты отличнигы, Хеҙмәт Ҡыҙыл Байраҡ, II дәрәжә Ватан һуғышы ордендары кавалеры Имаметдин Әбүзәровҡа 90 йәш; **22 июль** - К.С.Станиславский исемендәге РСФСР Дәүләт премияһы лауреаты Шәүрә Мортазинаның тыуыуына 90 йыл; **28 июль** - БР Ведомство-ара советының Йәмәғәт хәүефһеҙлеге секретары Рудик Искужинға 65 йәш; **30 июль** - билдәле телсе-тюрколог,филология фәндәре докторы, профессор Әхнәф Юлдашевтың тыуыуына - 95 йыл.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарының Өфөлә үтәсәк саммиттары тураһында нимә беләһегеҙ һәм был сараларға ниндәй мөнәсәбәттәһегеҙ?



***Ғәзиз ЙОСОПОВ, БР Башлығы хакимиәте Матбуғат хеҙмәте һәм мәғлүмәт идаралығының дәүләт власы органдары эшмәкәрлеген яҡтыртыу бүлеге кәңәшсеһе:*** Шәхсән мине Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитовтың республиканы яңы, халыҡ-ара кимәлгә сығарыуы ҡыуандыра. Сөнки саммиттар уҙған ваҡытта республикала 16 илдең башлыҡтары һәм донъя кимәлендәге баҫмаларҙың мең журналисы буласаҡ. Бынан 20 йыл элек, сит илдә белем алған осорҙа, Башҡортостан һәм Өфө тураһында бер кем дә белмәй ине тиерлек. Бөгөн был тарихи хата төҙәтеләсәк.

Саммиттар арҡаһында беҙ Пекин, Мәскәү, Санкт-Петербург, Бразилия - ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтарын ҡабул иткән ҡалалар рәтенә баҫабыҙ. Был - яңы статус һәм июлдә донъяның барлыҡ бизнес-элитаһының иғтибары Өфөгә йүнәлтеләсәк. Тимәк, инвесторҙар йәлеп итеүҙең яңы мөмкинлектәре асыласаҡ.

Оло форумды тап Өфөлә үткәреүҙең бөгөн күҙгә күренгән файҙаһы - ул аэропорттан башлап Конгресс-холлға, "Башҡортостан" концерт залына, Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына, Нестеров исемендәге Художество музейына һәм баш ҡала буйынса тағы ла биш бәләкәй объектҡа һалынған 10 миллиардтан ашыу сумманы билдәләр инем. Бынан тыш, Ағиҙел яры, 20-нән ашыу парк һәм 50 самаһы сквер төҙөкләндерелеүе лә ғәйәт ҙур эш икәнен һәр кем аңлай. Финанс күҙлегенән ҡарағанда, бөтә был эштәр беҙгә бик арзанға төшә - республика бюджетынан һалынған бер һумға биш һум шәхси һәм федераль инвестициялар һалына.

***Рәфис НИЗАЕВ, эшҡыуар:*** Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһы - планета халҡының дүрттән бер өлөшө, ә иҡтисади ҡеүәте АҠШ-тан ҡала икенсе урында килгән Ҡытай иҡтисадын үҙ эсенә алыуы менән иғтибарға лайыҡ. Ошондай ҡеүәтле ил менән бер ойошмала тороу Рәсәй өсөн дә бик кәрәкле һәм файҙалы, тиер инем. Тарихҡа күҙ һалһаҡ, борон-борондан Рәсәй көньяҡ ҡитғалар, Азия илдәре менән тығыҙ бәйләнештә йәшәгән. Алтын Урҙаны ғына алып ҡарағанда ла, ул донъялағы беренсе глобаль система булған, йәғни Көнсығыштың - көнбайыш, Европа цивилизацияһының Ҡытай цивилизацияһы, Яҡын Көнсығыш менән осрашыуы, бәйләнештәре. Өфө-II ҡаласығында бик күп Алтын Урҙа әйберҙәре табылыуы ла осраҡлы түгел. Сөнки беҙ - Алтын Урҙаның сауҙа-иҡтисади үҙәктәренең береһе булып торғанбыҙ. Ләкин төрлө сәбәптәр арҡаһында был бәйләнештәр туҡтала, Рәсәй йәлап Европаға йөҙ бора башлай. Әммә тәбиғәттең үҙ ҡанундары һәм уны нисек кенә үҙгәртергә тырышһаң да, ул барыбер урау юлдар аша булһа ла үҙенең төп тәғәйенләнешенә, асылына ҡайта. Илебеҙҙең, әгәр рациональ файҙаланғанда, үҫтергәндә, ҡеүәте ҙур, Ҡытай кеүек империя менән бер ойошмала булып, бер төптән эшләүе уны яңы офоҡтарға алып сығыуы ихтимал. Ә инде ҙур саммиттарҙың тап Өфөлә үтеүе лә осраҡлы түгел, Аллаһы Тәғәлә үҙе ҡеүәтле Алтын Урҙаның бер тармағы булған, донъяға билдәле Ебәк юлы үткән дәүләтебеҙгә ошондай мөмкинлек

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Рөстәм Хәмитов Рәсәй Һаҡлыҡ банкының Урал банкы рәйесе Владимир Черкашин менән осрашты. Ул республика Башлығын банктың Башҡортостан бүлексәһенең яңы идара итеүсеһе Марат Мансуров менән таныштырҙы. Осрашыу барышында яҡтар Һаҡлыҡ банкының Башҡортостан бүләмәһендә эш йомғаҡтарын тикшерҙе. Бынан тыш, Өфөлә Һаҡлыҡ банкының яңы офисын төҙөү мәсьәләһе лә ҡуҙғатылды.

✓Өфөгә "Синьхуа" агентлығының бер төркөм журналистары килде. Делегация составында "Синьхуа" агентлығының Мәскәүҙәге Азия-Европа бюроһы директоры Фань Вэйго, шулай уҡ дүрт хәбәрсе бар. "Синьхуа" (Xinhua, "Яңы Ҡытай") - Ҡытай Халыҡ Республикаһының рәсми мәғлүмәт агентлығы. Агентлыҡтың штаб-фатиры Пекинда урынлашҡан. Ҡытай бүләмәһендә уның 33 хәбәрселәр бюроһы асылған. 160-тан ашыу сит ил бүлексәләре бар, төрлө илдәрҙә 2500-ҙән ашыу үҙ хәбәрселәре, фотографтар һәм операторҙар эшләй.

✓Башҡортостан Башлығының сифат өлкәһендәге премияһына эйә булыусылар билдәләнде. Беренсе урын Өфө дәүләт нефть техник университетына, "Мәләүез тимер бетон конструкциялар заводы", "Ҡыҙыл пролетарий" асыҡ акционерҙар йәмғиәттәренә һәм 8-се ҡала клиник дауаханаһына бирелде. Икенсе урынға Башҡортостандың Техник инвентаризация бюроһы һәм "Стәрлетамаҡ икмәк комбинаты" лайыҡ булды.

✓Башҡортостанда республиканың 53 районының 775 ауыл биләмәһе Советында һайлауҙар тәғәйенләнгән. Улар быйыл 13 сентябрҙә Берҙәм тауыш биреү көнөндә үтәсәк, тип хәбәр иттеләр Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһынан. Берҙәм тауыш биреү көнөндә Башҡортостанда 784 һайлау кампанияһы үтә. 2015 йылдың 13 сентябрендә ете меңдән ашыу депутат мандаты алмаштырыласаҡ. 50-се Туймазы һәм 15-се Күмертау һайлау округы буйынса Башҡортостандың Дәүләт Йыйылышына өҫтәмә һайлауҙар, Приют һәм Шишмә ҡасаба Советтарына һайлауҙар тәғәйенләнгән.

✓4 һәм 5 июлдә температураның көндөҙ - 16, төндә 4 градус йылы булыуы көтөлә. Синоптиктар күҙаллауына ярашлы, июлдә Башҡортостанда уртаса һауа температураһы 16-19 градус тәшкил итәсәк, был норманан бер градусҡа түбән. Яуым-төшөм кимәле 60-70 миллиметр буласаҡ.

бирҙе һәм был үҙенә күрә тәрән символик мәғәнәгә эйә, тип баһалайым быны. Әгәр ошо мөмкинлекте тейешенсә файҙаланып, форум сиктәрендә Башҡортостанды лайыҡлы күрһәтә алһаҡ, был республика өсөн бик файҙалы буласаҡ, уны донъя аренаһына сығарасаҡбыҙ.

***Суфия БИКЙӘНОВА, хаҡлы ялдағы китапханасы:*** Был оло йыйын Башҡортостандың баш ҡалаһында үтә тигәстәре, башта бер аҙ хәүефләнеп, шикләнеп тә йөрөгәйнем. Сөнки ҙур кимәлдәге сараны уҙғарыу өсөн күпме әҙерлек һәм сығымдар талап ителә. Ләкин ошо эш өсөн яуаплы кешеләрҙең сығыштарын тыңлай-тыңлай, фекерем бер аҙ үҙгәрҙе. Бактиһәң, саммиттарҙы уҙғарыу өсөн Өфө бары тик майҙансыҡ ҡына булып тора, ә барлыҡ сығымдарҙы федераль бюджет үҙ өҫтөнә ала икән. Шул уҡ ваҡытта ҡунаҡ саҡырырға булһаң, кесе йортта ла донъяңды ҡырып тигәндәй таҙартаһың. Быны Өфө миҫалында ла күрергә мөмкин. Ошо әҙерлек барышында әллә күпме эштәр башҡарылды. Эйе, улар бөгөнгөнә түгел, ә киләсәкте күҙаллап тормошҡа ашырылды. Өфө аэропортында яңы халыҡ-ара терминал пассажирҙар ағымын тиҙ арала һәм сифатлы хеҙмәтләндереү мөмкинлеген асһа, ҡаланан аэропортҡа тиклем араулыҡтағы юл да ремонтланды. Парктар, скверҙар икенсе йөшлеген кисерә. Урамдарҙағы ҡарт ағастар алынып, улар урынына йәштәрҙе, ҡыуаҡлыҡтар ултыртылды. Яңы һалынған отелдәр ҙә баш ҡалаға үҙенсәлек биреп ултыра. Әлбиттә, уларҙың ҡолаҡҡа ятмаҫ атамалары ғына сәйерһендерә, тик донъяла бренд булып танылған атамаларҙы бер нисек тә үҙгәртеп булмай тиҙәр бит. Икенсенән, был отелдәр барыһы ла шәхси инвесторҙар аҡсаһына төҙөлгән, ә кем түләй - шул музыкаға заказ бирә инде.

Шулай уҡ оло ҡунаҡтар килгәндә республикала йәшәүсе халыҡтарҙың тарихын, мәҙәниәтен күрһәтеүсе күргәҙмәләр ҙә ойоштороласаҡ, тиҙәр. Әгәр отелдәрҙә, кафеларҙа милли ризыҡтарыбыҙҙы ла тәҡдим итһәк, уларҙа ҡурай моңо ағылып торһа - был үҙе үк республиканың бөсөн бермә-бер артырып ҡына ҡалмаҫ, ә донъя кимәленә сығырға бер этәргес булыр тип өмөтләнәм. Йәшерен-батырыны юҡ: килгән ҡунаҡтарға сувенирҙар, бүләктәр биреү ҙә матур йола. Һәр ҡунаҡҡа башҡорт балы, башҡорт халҡының ғына түгел, республиканың брендтары төшөрөлгән сувенирҙар мотлаҡ тапшырылыр, моғайын. Шуға күрә, был федераль кимәлдәге сара булыуға ҡарамаҫтан, ул Башҡортостан, уның иҡтисади ҡеүәтен үҫтереү, яңынан-яңы бәйләнештәр булдырыу, үҙенең брендтарын донъя кимәлендә танытыу өсөн ыңғай роль уйнаясағына шигем юҡ.

***Сәкинә МӨХӘМӘТОВА, күп балалы әсә:*** Дөрөҫөн әйткәндә, сәйәсәт ҡыҙыҡһындырмай мине. Әлеге ваҡытта балалар менән мәж килеп, баҡса эштәрен башҡарабыҙ, үҙебеҙгә ҡышҡылыҡҡа ризыҡ хәстәрләйбеҙ. Әле бына еләк өлгөрҙө, уны йыйып һатып та аҡса эшләргә мөмкин. Ауыл ерендә йәшәгәс, күпләп мал-тыуар аҫрайбыҙ. Мал аҫрағас, унан да файҙа күргә килә - аҡты эшкәртеп, мөмкин тиклем һатырға ла тырышабыҙ. Аҙаҡ инде бесән өлгөрә. Өләсәйҙәр, аяғың тыпылдамаһа, ауыҙың шапылдамай, тиһә, көлә торғайныҡ. Был һүҙҙәрҙең хаҡлығына йәшәй-йәшәй ышанаһың икән. Шуға ла ваҡыттың һәр минутын әрәм итмәҫкә тырышабыҙ, хатта телевизор ҡарарға ла ваҡыт юҡ. Ә инде ил етәкселәре ниндәйҙер йыйылыштар үткәрә икән - үҙҙәре нимә эшләгәндәрен беләләрҙер инде. Әйҙә, йыйылышһындар, һөйләшһендәр, кәңәшләшһендәр, тик эштәренең ыңғай һөҙөмтәһе ябай халыҡҡа ла килеп етһен ине. Беҙҙең дә бит лайыҡлы йәшәгә, балаларҙы лайыҡлы итеп үҫтерге килә. Шул балалар тип йәшәйбеҙ бит. Иң мөһиме, балалар иҫән-һау булып, ҡайғы килтермәһендәр. Ил имен булһын. Башҡа килгән бәлә түгел, илгә бәлә килмәһен!

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

## ТУРАҺЫН ӘЙТКӘНДӘ...

**2015 йылдың икенсе ярты йыллығына матбуғатҡа яҙылыу кампанияһы тамамланды. Барыһы өсөн дә һөҙөмтәле үтмәне ул. Ҡайһы бер баҫмалар күпләп тиражын юғалтты, күп кенә гәзит-журнал алдырыусылар уҡыусылар исемлегенән төшөп ҡалды.**

# УҠЫ, ӨҪТӨНЛӨК БИР...

## туған телеңдәге баҫмаға



Гәзит-журналдарға яҙылыу әллә ни мәшәҡәт, ауырлыҡ талап итмәгән, һәр кемдең теләгенән, мөмкинлегенән сығып башҡарылған гәмәл. Әммә тәү ҡарамаҡҡа ябай ғына күренгән ошо эштең нигеҙендә тәрән мәғәнә, хәҡиҡәт ята. Матбуғат - телебеҙҙе, милләтебеҙҙе һаҡлаусы һәм яҡлаусы сара, рухиәтебеҙ билдәһе. Ә уларҙың күплеге, тиражы үҙ телендә сыҡҡан баҫмаларҙы алдырып уҡыған милләттәштәребеҙҙең ни тиклем берҙәм, сәмле, туған теленә, мәҙәниәтенә битараф булмауы күрһәткесе ул.

Гәзит алдырып ҡына әллә ни ҡыйратып булмай, тиер кемдер. Ә бит милләттәр белемле кешеләре менән көслө, тигән һүҙҙәрҙе йыш ҡабатларға яратабыҙ. Туған телендә гәзит уҡыусыларҙың күпмелегенән сығып уҡырға яратҡан, матбуғат менән ҡыҙыҡһынған мәҙәни милләттәштәребеҙҙең һаны күренә түгелме? Аҡса юҡ, гәзит хаҡы ҡиммәт, тиер икенсе берәһе. Затлы машиналарҙа елдергән, матур-матур йорттар һалған, йыл һайын сит илгә ял итергә йөрөгән, дәрәжәле урындарҙа юғары эш хаҡы алып эшләгән милләттәштәребеҙ аҙмы ни? Әллә нисә меңләп аҡса түгеп, кафе, ресторандарҙа тамада, музыканттар яллап, мәжлес ҡороусылар, 5-6-шар меңлек хушбүйҙәр һөрткән, ҡиммәтле биҙәнгестәр һәм хатта ябыҡтырыу өсөн ат хаҡындай ҡиммәтле препараттар алған, солярий, фитнес юлын тапаған гүзәл заттарыбыҙ ни тиер? Күңелең, рухи донъяң бай булмағанда, тышҡы матурлыҡ ҡына йәм бирәме ни? Йә булмаһа, шау-шыу тыуҙырып күңел асҡандан ғына баһаң күтәреләме лә, абруйың артып китәме? Ваҡыт юҡ, тип тә әйтер өсөнсө берәһе. Көн-төн интернет киңлектәрен гиҙгән, йылдар буйына һуҙылған сит ил сериалдарын ҡарағандар нимә тип яуап бирер һуң?

Бер мин генә уҡымағандан әллә ни зыян юҡ, тип уйлаусылар ҙа хаталана, сөнки уның эргәһендә нәҡ шулай тип уйлаусы тағы ла берәү йәшәүен күҙ уңынан ысҡындыра. Эйе, ниәт иткән йәҙ сәбәп табыр, тиҙәр. Сәбәп булмағанда ла, яй табып, форсат сығарып, тамырыбыҙға балта сабыуыбыҙҙы аңлаһаҡ, ошо хаҡта балаларыбыҙға ла төшөндөрһәк ине лә бит...

"Дуҫтарыбыҙ, тип өндәшһәм, ябылыуыма юл ҡуймаҫ инегеҙ. Башҡорттар, тиһәм дә дөрөҫ булмаҫ, башҡорт булһағыҙ, үҙ телегеҙҙәге журналды алдырып уҡыр инегеҙ. Йырлап торам, бейеп торам - ҡайһы ерем оҡшамай?" тип үпкәләп тә, борсолоп та яҙып сыҡҡайны "Аманат" балалар журналы. Ә бит журналда йәш быуын өсөн генә түгел, ололарға ла бик күп ҡыҙыҡлы, фәһемле мәҡәләләр баҫыла. Нәҡ үҙебеҙҙең баҫмалар аша башҡортлоғобоҙҙо танытыуыбыҙҙы, йәшәйешебеҙе сағылдырыуыбыҙҙы, киләсәгебеҙҙе дауам итерҙәй аҡыллы, матур балалар тәрбиәләүебеҙҙе күрһәтеүебеҙ хаҡында ла саҡ ҡына уйлана белмәйбеҙ.

Бөгөн бәләкәй генә эш хаҡынан йәки пенсияһынан өҙөп, матбуғатҡа яҙылған, оҙаҡ йылдар гәзит-журналдарҙың дуҫы булып ҡалған уҡыусыларға рәхмәт әйтке килә. Нәҡ уларҙың теленә, халҡына булған илһөйәрлеге менән милли матбуғатыбыҙ йәшәй һәм үҙ телебеҙҙә республика, район-ҡала яңылыҡтары, уның үҫеш-ҡаҙаныштары, билдәле һәм абруйлы кешеләре, матур ғаиләләре, ойошторолған саралар тураһында һөйләүҙән туҡтамай.

Үкенескә күрә, почтальондар етешмәүе арҡаһында почта таратыуҙа төрлө проблемалар килеп сығып тора, баҫмалар ваҡытында үҙ уҡыусыһына барып етмәй, баҫылған мәғлүмәт һуңлап еткерелә. Шул арҡала уҡыусылар ҙа, баҫмалар ҙа зыян күрә. Халыҡтың гәзиткә яҙылыуҙан күңеле һүрелә, тираж да юғала. Тираж юҡ икән, тимәк, үҙ телебеҙҙә сыҡҡан матбуғаттың да көндәре ҡыҫҡара. Гәзит-журналдар бөтһә, журналистар эшһеҙ ҡала, тип тә уйлай ҡайһы берәүҙәр. Был төптә хата фекер, хәҙер күптәр икешәр юғары белемгә эйә, ә дипломлы кешегә ҡайҙа булһа ла эш табыласаҡ.

Эйе, уҡыусыларыбыҙ араһында гәзит-журналдарҙың төрлөһөн алдырыусылар бар. Барыһы ла мотлаҡ ниндәйҙер айырым баҫмаға өҫтөнлөк бирергә тейеш, тигән талап юҡ. Әммә һәр ғаиләнең мотлаҡ үҙ телендә сыҡҡан, яратып уҡыған ниндәйҙер гәзите йә журналы булырға тейеш. Шул баҫмаларҙы уҡып, телебеҙ үҫешенә, киләсәгенә өлөш индерәйек. Үҙ телебеҙҙән баш тартып, сит тирмәнгә һыу ҡоймайыҡ. Башҡортлоғобоҙҙо исемдә генә түгел, эшебеҙҙә лә күрһәтәйек.

**Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостанда Йәмәғәт палатаһының яңы составы ойошторолдо. 29 июндә Башҡортостан Башлығы Указы менән раҫланған күренекле йәмәғәт эшмәкәрҙәре конкурс нигеҙендә Йәмәғәт палатаһы составына ун биш йәмәғәт берләшмәләре вәкилен ҡабул итеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Улар - Дамир Әхтәмов, Сергей Гладких, Анатолий Дубовский, Гүзәл Егорова, Лида Исаргакова, Вәкил Ильясов, Дмитрий Казанцев, Юнир Минишев, Марат Рахманов, Тамара Танһыҡҡужина, Алина Трусова, Рим Фаррухшин, Хайрат Таҡтаев, Әнүәр Шәңгәрәев, Денис Йомаҙилов.

✓1 июлдән коммуналь ресурстарға тариф арта. Халыҡ газ өсөн - 7,5, электр энергияһына - 8,5, йылылыҡ энергияһына уртаса 11,4, һыу менән тәьмин итеү һәм һыу бүлеү хеҙмәттәренә 22 процентҡа күберәк түләй башлаясаҡ. Июнь айы өсөн квитанцияла баҫылған мәғлүмәткә ярашлы, һыуыҡ һыуҙың бер кубометры - 21 һум 16 тин (2015 йылдың 1 ғинуарынан ул 18,5 һум ине), һыу бүлеү - 18,44 һум, йылылыҡ энергияһы 1774 һум 31 тин буласаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте ҡарамағындағы Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге премиялар буйынса комиссия документтар ҡабул итеү хаҡында иғлан итте. Дәғүәселәрҙән документтар 2015 йылдың 1 сентябренә тиклем түбәндәге адрес буйынса ҡабул ителә: 450079, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13, Башҡортостандың Журналистар союзы, 1007-се офис (Матбуғат йортоноң 10-сы ҡатында). Телефон (факс): (347) 276-42-66.

✓1 июлдән эскән килеш транспорт сараһы менән идара иткән өсөн икенсе тапҡыр тотолған водителдәр енәйәт яуаплылығына тарттырылырға тейеш һәм 200 мең һумдан 300 меңгә тиклем штраф түләй йәки 2 йылға рәшәткә артына эләгәсәк. Яуаплылыҡ 1 июлдән үҙ көсөнә инә.

✓Башҡортостанда быйыл Берҙәм дәүләт имтиханын 22 меңдән ашыу кеше тапшырған. Информатика һәм мәғлүмәт-коммуникация технологияларын иҫәпкә алмағанда, предметтар буйынса уртаса балл күтәрелгән. 61 кеше Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға яҙған, шулар араһында 37 уҡыусы рус теленән, 12-һе - физика, алтауһы - география, өсәүһе - химия, икәүһе - биология һәм берәүһе информатика буйынса иң яҡшы һөҙөмтә күрһәткән.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Шулай уҡ мәр һәр үҙәктә, урындағы бренд продукттары, башҡорт балы, мөрәжәғәт итеүселәр телефондарын, планшеттарын, башҡа гаджеттарын зарядкаға ҡуйып алһын өсөн розеткалар булырға тейешлеген билдәләнә.*



*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

# ИЗГЕ МАҠСАТ ЙЫЙҘЫ

**Бер аҙнанан баш ҡалала ШОС һәм БРИКС илдәре саммиттары үтәсәк. Шул йәһәттән ҡайһы бер ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр менән таныштырмаҡсыбыҙ.**

● ШОС - Шанхай хеҙмәттәшлеге ойошмаһы 2001 йылда Ҡытай, Рәсәй, Ҡаҙағстан, Тажикстан, Ҡырғыҙстан һәм Үзбәкстан лидерҙары тарафынан ойошторолған Халыҡ-ара төбәк ойошмаһы. Берләшмәгә ингән илдәрҙең дөйөм территорияһы Евразия территорияһынның 30 процентына тиң. Уның дөйөм демографик ҡеүәте - планета халҡының дүрттән бер өлөшө, ә иҡтисади ҡеүәте АҠШ-тан ҡала икенсе урында килгән Ҡытай иҡтисадын үҙ эсенә алыуы менән иғтибарға лайыҡ. НАТО кеүек хәрби блок та, АРФ АСЕАН кеүек именлек буйынса даими асыҡ кәңәшмә лә түгел, ә арауыҡтағы позицияла булыуы ШОС-тың үҙенсәлеге булып тора. 2002 йылда ШОС илдәре башлыҡтары Санкт-Петербургта ШОС-тың ағза илдәре башлыҡтары декларацияһын һәм ШОС хартияһын ҡабул итә. Хартияның маҡсаттарын һәм бурыстарын тормошҡа ашырыу өсөн ойошма сиктәрендә Дәүләттәр башлыҡтары советы (СГГ); Хөкүмәттәр башлыҡтары советы (СГП); Сит ил эштәре министрҙары советы (СМИД); министрлыҡтар һәм ведомстволар етәкселәре кәңәшмәһе; Милли координаторҙар советы (СНК); Террорға ҡаршы төбәк структураһы (РАТС); Секретариат - Генераль секретарь етәкләгән даими нигеҙҙә эшләүсе административ органдар ойошторола. Унда 2012 йылдың декабренән Рәсәй вәкиле булып Дмитрий Мезенцев эшләй. Рәсми телдәр булып инглиз һәм рус телдәре һанала.

● Хартияның 1-се статьяһына ярашлы, төп маҡсаттар һәм бурыстар шулай билдәләнгән:

- ағза илдәр араһында үҙ-ара ышаныс, дуҫлыҡ һәм күршелекте нығытыу;
- төбәктә именлекте һәм тотороҡлоҡто, тыныслыҡты нығытыу һәм һаҡлау, яңы демократик, ғәҙел һәм рациональ сәйәси һәм иҡтисади халыҡ-ара тәртип булдырыу буйынса киң профилле хеҙмәттәшлек;
- терроризм, сепаратизм һәм экстремизмдың барлыҡ сағылышына ҡаршы тороу, наркотиктар һәм ҡоралдың законһыҙ әйләнеше, шулай уҡ законһыҙ миграция менән көрәш;
- сәйәси, сауҙа-иҡтисади, оборона, хоҡуҡ һаҡлау, тәбиғәтте һаҡлау, мәҙәни, фәнни-техник, мәғариф, энергетик, транспорт, кредит-финанс һәм башҡа өлкәләрҙә һөҙөмтәле төбәк хеҙмәттәшлеге;
- ағза илдәр халыҡтарының тормош шарттарын яҡшыртыу һәм тормош кимәлен күтәреү маҡсатында төбәктә һәр яҡлы һәм баланслы иҡтисади, социаль һәм мәҙәни үҫешкә берлектәге эшмәкәрлек менән ярҙам итеү;
- донъя иҡтисадына интеграцияланыуҙы көйләү;

ағза илдәрҙең халыҡ-ара йөкләмәләренә һәм уларҙың дәүләт ҡануниәтенә ярашлы, кешенең төп азатлығын һәм хоҡуҡтарын тәьмин итеү;

- башҡа дәүләттәр һәм халыҡ-ара ойошмалар менән мөнәсәбәттәр булдырыу һәм уларҙы үҫтереү;
- халыҡ-ара низағтарҙы тыныс юл менән хәл итеүҙәге хеҙмәттәшлек;
- XXI быуатта килеп тыуған проблемаларҙы хәл итеү юлдарын бергәләп эҙләү.

**(Дауамы 5-се биттә).**

*ӨФӨ ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ!*

# ШУНДАЙ УҢАЙЛЫҠТАР...

## йәйәүлеләргә,



**"Өфө-Аэропорт" трассаһындағы "Кооператив ялан" туҡталышы эргәһендә йәйәүлеләр өсөн яңы төҙөлгән ер өҫтө үткәүеле сафҡа индерелде. Уның оҙонлоғо - 46,78, бейеклеге 5,5 метр. Сәғәтенә 6 мең кешене үткәреү ҡеүәтенә эйә. Был үткәүелдә хәрәкәтләнергә ауыр булған граждандар өсөн автоматлаштырылған күтәреүсе ҡулайламалар ҡуйылған.**

Шулай уҡ үткән аҙнала "Ял кафеһы" туҡталышында ер өҫтө үткәүелдәренең береһе тапшырылғайны. Оҙаҡламай "Озерная" һәм "Металл базаһы" туҡталыштарындағы үткәүелдәр ҙә файҙаланыуға тапшырыласаҡ. Уларҙың һәр ҡайһыһы үҙенсәлекле конструкцияға эйә һәм тәжрибә объекты булып һанала. Ниндәй модель файҙаланыуҙа уңайлыраҡ итеп таныла, артабан ул Өфө ҡалаһы эсендә, автотранспорт хәрәкәте көслө булған урындарҙа ла ҡороп ҡуйыласаҡ.

Шулай уҡ баш ҡалала ер аҫты үткәүелдәре лә реконструкциялана. "Үҙәк баҙар" туҡталышындағы ер аҫты үткәүеле көнөнә иң күп йәйәүлеләр ағымын хеҙмәтләндереүгә ҡарамаҫтан, унда эш гөрләй: иҫке плиталар алына, туҙған панелдәр яңыртыла. Артабан инде стеналар һәм баҫҡыс майҙандары яңыртыласаҡ, мәрмәр плиталар гранитҡа алмаштырыласаҡ. Иҙәненә асфальт түшәләсәк, ә түбәһенә керамогранит йәбештереләсәк. Хәрәкәтләнеүе ауыр булған граждандарға һәм балаларын коляскала йөрөткән әсәләр өсөн яңы яндауырҙар, пандустар һәм төшөү юлдары эшләнәсәк. Йәйәүлеләр үҙҙәрен тәүлектең ҡараңғы ваҡытында ла хәүефһеҙ тойһон өсөн электр проводтарын алмаштырып, ватылмай торған яҡтыртҡыстар ҡуйыласаҡ. Был эш ай ярым эсендә тамамланасаҡ һәм заманса ҡиммәтле материалдар ҡулланыу һөҙөмтәһендә ер аҫты үткәүеле эстетик төҫ аласаҡ. Әлеге ваҡытта шулай уҡ "Өфө" универмагы", "Аграр университет", "Спорт" туҡталыштарындағы ер аҫты үткәүелдәре лә төҙөкләндерелә.

## ... туристарға,



**Мәғлүмәт-туристик үҙәктәр туристик инфраструктураның мөһим бер тармағы булып тора. Улар берҙәм мәғлүмәт майҙаны булдырыуҙа төп ролде уйнап ҡына ҡалмай, конкурентлыҡҡа һәләтле туристик продуктты танытыуға ла йоғонто яһай.**

Башҡортостандың баш ҡалаһында туриндустрияны үҫтереүгә айырым иғтибар бүленә. Өфөлә ойошторолған дүрт мәғлүмәт үҙәге сәйәхәтселәр өсөн заманса һәм уңайлы инфраструктураның мөһим өлөшө булып торасаҡ. Улар Зәки Вәлиди урамы, 1 адресы буйынса Конгресс-холл алдында, Революцион урамы, 26 адресы буйынса Инвестицион-төҙөлөш комитеты бинаһында, Киров һәм Ленин урамдары киҫелешендә, "Өфө-матбуғат" киоскыһы базаһында, "Үҙәк баҙар" туҡталышында "I-UFA" атамаһы аҫтында урынлашҡан. Әлегә бында 150 сит ил граждания, шул иҫәптән Европа илдәре сәйәхәтселәре лә, шулай уҡ республика һәм ил граждандары ла, мөрәжәғәт иткән. Алдағы көндәрҙә лә туристик мәғлүмәт үҙәктәре тест режимында эшләүен дауам итәсәк.

Ошо көндәрҙә уларҙың эше менән Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов танышты. Мәғлүмәт үҙәге етәкселеге менән әңгәмә барышында ул туризм тармағында иң яҡшыларҙан тип табылған Швейцарияның Лозанна һәм Женева ҡалаларының шундай уҡ үҙәктәренең эшмәкәрлеген миҫал итеп килтереп, ошо йүнәлештә эшләргә кәрәклеген белдерҙе. Шулай уҡ мәр һәр үҙәктә, сувенирҙарҙан тыш, урындағы бренд продукттары, атап әйткәндә, башҡорт балы, мөрәжәғәт итеүселәр телефондарын, планшеттарын, башҡа гаджеттарын зарядкаға ҡуйып алһын өсөн розеткалар булырға тейешлеген билдәләнә.

Киләсәктә был үҙәктәр ҡала халҡына һәм килгән ҡунаҡтарға төрлө яҡлап мәғлүмәт ярҙамы ғына күрһәтеп ҡалмаясаҡ, ә ҡала менән таныштырыу турҙары ойоштораcаҡ, гидтар һәм тәржемәселәр хеҙмәте күрһәтәсәк, туроператорҙар һәм турагентлыҡтар менән хеҙмәттәшлек итәсәк, туристар өсөн отелдәрҙә һәм ҡунаҡханаларҙа урындарға бронь аласаҡ һәм башҡа хеҙмәт күрһәтәсәк.

## ... һәр кемгә



**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов ошо арала төҙөлөш эштәре менән танышты. Инвесторҙар аҡсаһына Комсомол һәм Урман техникумы урамдары киҫелешендә төҙөлгән акваүҙәк ул ҡараған тәүге объект булды.**

Өфө акваүҙәгендә, Петербургтың ғәмәлдәге спорт комплекстарындағы кеүек үк, өс бассейн буласаҡ. Уларҙың береһе ғәҙәти, икенсеһе - балалар, өсөнсөһө ауыр хәрәкәтләнеүсе категория өсөн. Үҙәктә шулай уҡ спорт залдары, һауыҡтырыу спа-салоны, туҡланыу нөктәһе урынлашасаҡ. Объекттың дөйөм майҙаны 8,5 мең квадрат метр һәм ул көнөнә ике меңдән ашыу кешене хеҙмәтләндерә аласаҡ.

"Глумилино-2" микрорайонындағы йорт авария хәлендәге торлаҡта йәшәүсе граждандарҙы күсереү буйынса программаны тормошҡа ашырыу маҡсатында төҙөлә. Бессонов һәм Комсомол урамдары киҫелешендә урынлашҡан "Фестиваль" торлаҡ комплексы мэр ҡараған өсөнсө объект булды. Уның дөйөм майҙаны 80 539 квадрат метр. Проект буйынса ер аҫтында 530 машинаға иҫәпләнгән ике кимәлле паркинг буласаҡ. Бынан тыш, ҙур велопарковка булдырыу ҙа ҡаралған. Территорияла балалар спорт майҙансығы, уйын майҙандары, фонтанлы сквер эшләү, заманса яҡтылыҡ сығанағы, хәүефһеҙлек системаһы ҡуйыу планлаштырыла. Торлаҡ комплексы менән идара итеүҙе төҙөүсе компанияның үҙ ойошмаһы башҡарасаҡ һәм был төҙөүсе менән йортта йәшәүселәр араһындағы аңлашылмаусылыҡты булдырыуға юл ҡуймаясаҡ.

Ленин районында "8 Март" ҡасабаһынан алыҫ түгел 28,4 гектар майҙанда "Ҡарағай" торлаҡ комплексы төҙөлөшө лә мэрҙың иғтибар үҙәгендә булды. Бында ла "машиналарһыҙ ихата" концепцияһы тормошҡа ашырыла. Административ-сауҙа өлөшөндә аҙыҡ-түлек супермаркеты, банк бүлексәһе, химик таҙартыу, ресторан, теннис корттары, волейбол һәм футбол майҙансыҡтары, декоратив күл, бассейны булған фитнес үҙәге, матурлыҡ салоны һәм спа-үҙәк урынлашасаҡ. Комплекс территорияһында 150 урынлыҡ балалар баҡсаһы буласаҡ. Шулай уҡ ҡасабанан алыҫ булмаған урында урынлашҡан ҡала мәктәбен реконструкциялау планлаштырыла. Ирек Ишмөхәмәт улы тағы бер нисә объектта булып, бөгөнгө иҡтисади хәл-торошҡа ҡарамаҫтан, төҙөлөш комплексы үҫеше менән ҡәнәғәт булыуын белдерҙе.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ Башҡортостан юлдаш телеканалында "Башҡортостан" киностудияһының иң яҡшы фильмдары күрһәтелә. Республика халҡы, шулай уҡ Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттары ҡунаҡтары төрлө йылдарҙа төшөрөлгән уйын, документаль һәм анимация фильмдарын ҡарай ала. 30 июндән 12 июлгә тиклем ете фильм эфирға сыға. 12 июлдән һуң фильмдар күрһәтеү дауам итәсәк. Бөтәһе 22 фильм күрһәтеү ҡаралған.

✓ Быйыл Башҡортостанда Ҡытай ҡорамалдарында Рәсәйҙәге тәүге завод төҙөлә башлай. Һүҙ Ишембай ҡалаһындағы яңы ҡорос прокаты заводы тураһында бара. Был урындағы "Ишсталь" предприятиеһының һәм Ҡытайҙың "Цяо-Лян" ауыр сәнәғәт проектлау институты"ның проекты. Яңы предприятиела өс төр продукция, нигеҙҙә төҙөлөш тармағы өсөн арматура сығарыласаҡ. Етештереү күләме йылына 300-320 мең тонна тәшкил итәсәк. Сеймал үҙебеҙҙеке буласаҡ.

✓ Өфөлә үтәсәк Шанхай хеҙмәттәшлек ойошмаһы һәм БРИКС саммиттары уңайынан "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһында "Йәш күңелле боронғо ҡала" исемле фильм төшөрөлдө. Республиканың баш ҡалаһы Өфөгә арналған документаль фильм ҡаланың һәм республиканың үҙенсәлекле бренды, уның сәнәғәт предприятиелары, мәғариф, һаулыҡ һаҡлау, мәҙәниәт, спорт һәм башҡа объекттары хаҡында бәйән итә. Фильмдың авторы билдәле тележурналист Гәүһәр Батталова. Фильм инглиз телендәге субтитрҙар менән бирелә. Фильмдың беренсе өлөшө - 3 июлдә, икенсеһе 6 июлдә "Рәсәй 24" каналында эфирға сыға.

✓ Өфө үҙәгендә Рәсәй-Ҡытай Дуҫлыҡ йорто барлыҡҡа киләсәк. Төҙөлөш хаҡында "Бан Бан" компанияһының генераль директоры Зарема Бикәнәсова хәбәр итте. Билдәләнеүенсә, проектты "Zhong Ge" компанияһы ғәмәлгә ашыра. Дуҫлыҡ йортонда "Ике йылға араһы" алмашыу клубы булыр тип күҙаллана. Бинала йәштәрҙең алмашыу клубы, ҡунаҡхана, муниципаль хеҙмәттәр үҙәге, административ офистар, Ҡытай медицинаһы һарайы, Азия һәм Европа аш-һыуҙары рестораны буласаҡ. Объект тулыһынса инвестор иҫәбенә төҙөләсәк.

✓ Баш ҡалала Дуҫлыҡ монументы эргәһендә яҡтылыҡ сығанағын ҡояш энергияһынан туплаған беренсе туҡталҡа эшләй. Эске яҡтан ул лампалар һәм Өфөнөң тарихи күренештәре менән биҙәлгән. Тап улар көндөҙ ҡояш нурынан алған энергия ярҙамында яҡтыртыла ла инде. Был шәхси инвестор средствоһына эшләнгән проект.

✓ *Ҡыҙҙарҙың төрлө хәрәкәттә ҡатып ҡалған һындарында, һылыу йөҙҙәрендә милләтебеҙҙең рух көсө, саялығы, күңел донъяһы, баш бирмәҫ холҡо сағыла.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАЛАЛАР ЕҢЕҮЕ



**Ошо көндәрҙә Өфөнөң бер төркөм спортсы балалары Голландияның Алкмар ҡалаһында үткән 2015 йылғы Йәйге халыҡ-ара балалар уйындарында ҡатнашты. Делегацияны Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов етәкләне.**

Өфө командаһы Халыҡ-ара балалар уйындарында 2011 йылдан бирле ҡатнаша. Хәтерегеҙҙәлер, ошондай юғары кимәлдәге, ҡышҡы уйын төрҙәрен үҙ эсенә алған балалар уйындары бынан бер-нисә йыл элек Өфөлә лә уҙғайны. Өфө командаһы ул ярышта ла һынатмағайны. Ләлә сәскәләре илендә үткән быйылғы ярышта ҡатнашыусы дзюдо, еңел атлетика, спорт гимнастикаһы һәм волейбол менән шөғөлләнеүсе 14 бала шулай уҡ оло еңеүҙәр яуланы. Улар иҫәбендә 5 - алтын, 1- көмөш, 2 бронза миҙал!

Өфөнөң волейбол командаһы егеттәре бер тапҡыр ҙа еңелеү күйөнөсө кисермәй һәм алтын миҙалға лайыҡ була. Гимнастар Светлана Мазунина (ике алтын) һәм Екатерина Левченко ла үҙ командаһын алға сығарыуға үҙ өлөшөн индерә. Светлана - ирекле программала, ә Екатерина алдан билдәләнгән программала беренсе урын яулай. Гимнастар командаһы шулай уҡ команда многоборьеһы ярыштарында ла матур һөҙөмтә күрһәтә. Был - тағы бер алтын миҙал, тигән һүҙ. Дзюдо оҫталары Илья Алонов менән Данила Баландин иһә бронза миҙалға лайыҡ була. Еңеүселәр араһында ике бер туған енел атлеттар - Айҙар менән Айрат Шәйхетдиновтар ҙа бар. Айҙар көмөш миҙал яулаһа, Айрат 4-се урын алып, шулай уҡ яҡшы һөҙөмтә күрһәтә.

Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух, тигәндәй, һуңғы йылдарҙа Өфөлә, республикала сәләмәт йәшәү рәүешенә, спортҡа ылыҡыусы балаларҙың арта барыуы һөйөндөрә. Өфөнөң спорт майҙансыҡтарында хоккей уйнаған, футбол типкән малайҙар күбәйҙе. Иртәле-кисле йүгереп, тән яҙлыҡтырған, велосипедта йөрөгән йәштәр ҙә күп. Спорт тотош йәмғиәт шөғөлө дәрәжәһенә күтәрелеп етмәһә лә, балаларыбыҙҙың Халыҡ-ара кимәлдәге уйындарҙа ҡатнашыуы, етмәһә, оло еңеүҙәр яулауы киләсәккә яҡты өмөттәр уята барыбер.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

БЫУАТ ВАҠИҒАҺЫ

# ЕТЕ ҠЫҘ...

## фонтан урғылта

**(Башы 1-се биттә).**

ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек барышында баш ҡалабыҙ күҙгә күренеп үҙгәрҙе, түбәләре күккә олғашҡан ҡунаҡхана бинаһары үҫеп сыҡты, ҡала урамдары, парктар, аллеялар яңы һулыш алды. Заманса төҙөлгән биналар араһында Өфөнөң тарихи йөҙө юғалып ҡалыр, башҡорт милләтенең рухиәте, тарихы, мәҙәниәте төҫһөҙләнмәҫме, тигән шомло уйҙар баш ҡаланың үҙәгендә төҙөлгән "Ете ҡыҙ" фонтанын асыу тантанаһын күргәс тә юҡҡа сыҡты. Ҡала халҡы кискеһен ҡойма ямғыр яуыуы тураһында мәғлүмәтле булһа ла, Театр баҡсаһы майҙансығында алма төшөрлөк тә урын булманы. Ямғыр башланғанда ла кешеләр таралырға ашыҡманы, бәләкәс балаларын ҡосаҡлап, ҡулсатырҙар аҫтына һыйынып, башҡорт халыҡ көйҙәре менән бер тактҡа урғылған һыуҙы, бер як ситтәрәк урынлаштырылған ҙур экрандан "Ете ҡыҙ" бейеүен башҡарыуҙарын һәм Башҡортостандың хозур тәбиғәт күренештәрен күҙәтеп тора бирҙе. Улар араһында төрлө милләт вәкилдәре булыуы күңелгә май булып яғылды. Сөнки башҡорт халҡының боронғо рухи көлгәһендә йәшәүсе, уға килеүсе бүтән милләттәргә үҙебеҙҙең ауыҙтел ижадыбыҙға, йыр-бейеү сәнғәтебеҙгә, рухи мираҫыбыҙға ҡарата ихтирам тәрбиәләү бына ошолай башлана ла инде.

Әйткәндәй, бер яҡ ситтә башҡорт, рус һәм инглиз телендә "Ете ҡыҙ" легендаһының йөкмәткеһе яҙылған таҡтаташ ҡуйылған. Ике метр бейеклектәге ҡыҙҙар һыны бронзанан ҡойолған булыуға ҡарамаҫтан, шул тиклем нәзәкәтле, наҙлы. Гүйә, баҫҡынсыларҙан ҡасып, күл төбөндә тыныслыҡ тапҡан һылыуҙар терелеп, һыу өҫтөнә ҡалҡып сыҡҡан да, көй ыңғайына талғын ғына бейергә төшөп киткән. Ҡыҙҙарҙың төрлө хәрәкәттә ҡатып ҡалған һындарында, һылыу йөҙҙәрендә милләтебеҙҙең рух көсө, саялығы, күңел донъяһы, баш бирмәҫ холҡо сағыла. Иғтибарлап ҡараһаң, бер яҡ ситтә ҡулына ҡурай тотоп ултырған бөйөк композитор Заһир Исмәғилев, әйтерһең дә, ҡыҙҙарҙы әле генә бейетеп туҡтаған, улар хатта хәрәкәттәрен тамамлап та өлгөрмәгән төҫлө. Композиция башҡа милләттәргә башҡорт халҡы тураһында һөйләһә, бында килгән башҡорттарға ул берҙәмлекте, үҙ асылыңа тоғролоҡто һынландырған символик образ булып күренде. Хатта "Ете ҡыҙ" фонтаны ете башҡорт ырыуының татыулығын да һынландырған кеүек тойолдо.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Ете ҡыҙ" музыкаль фонтаны көн дә кешеләр күп йөрөгән ваҡытҡа тура килтереп, иртәнсәк, төш һәм кис көн һайын биш тапҡыр һыу урғылтасаҡ, моңонда тибрәлтәсәк. Киләсәктә был урын, Салауат Юлаев майҙаны кеүек, бөтәһе өсөн дә матур ял итеү урынына, милләттәштәребеҙ өсөн тағы бер рухи берҙәмлек үҙәгенә әүерелер, тип өмөт итәйек.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!

# ИЗГЕ МАҠСАТ ЙЫЙҘЫ

**(Башы 4-се биттә).**



Ойошмаға күҙәтеүсе илдәр булып Һиндостан, Иран, Монголия, Пакистан, Афғанстан инә. Беларусь, Шри-Ланка, Төркиә диалог буйынса партнерҙар булып тора. Бынан тыш, ШОС БМО, БДБ, ОДКБ, ЕврАзЭС һәм АСЕАН менән хеҙмәттәшлек итә.

Терроризмға ҡаршы төбәк структураһы (РАТС) эшмәкәрлеге үҙенең һөҙөмтәләрен бирә лә инде. Уның башҡарма директоры В. Ҡасимов белдереүенсә, ике саммит араһында ғына ШОС илдәре территорияһында 450 теракт иҫкәртелгән, ойошма илдәренең махсус хеҙмәттәре тарафынан террористик ойошмаларҙың 15 башлығы ҡулға алынған йәки юҡ ителгән, 400 кеше әҙәрлекләүҙә.

ШОС баштан уҡ күрше дәүләттәрҙең сиген бергәләшеп һаҡлау маҡсатынан ойошторолһа ла, уның эшмәкәрлеге иҡтисади йүнәлеш ала. Эш башлағандан һуң бер нисә ай үткәс, ағза илдәрҙең премьер-министрҙары төбәк-ара сауҙа-иҡтисади хеҙмәттәшлек мәсьәләләре буйынса фекер алыша һәм ошо хаҡта Меморандумға ҡул ҡуя. 2003 йылдың сентябрендә ШОС ағза илдәре 20 йылды күҙаллаған Күп яҡлы сауҙа-иҡтисади программаһын ҡабул итә. ШОС-та ирекле сауҙа зонаһы булдырыу, ҡыҫҡа ваҡытлы маҡсатта төбәктә тауар әйләнешен үҫтереү оҙайлы маҡсат булып тора. Хеҙмәттәшлек үҙ эсенә энергетика, транспорт, ауыл хужалығы, телекоммуникациялар, тирә-яҡ мөхитте һаҡлау һ.б. үҙ эсенә ала. Был йүнәлештәге эшмәкәрлек планына бер йыл үткәс ҡул ҡуйыла.

2006 йылдың йәйендә үткән Эшлекле совет ошо процесты формалаштырыуға бер аҙым була. Ул ШОС илдәренең хөкүмәт һәм финанс даирәләрен берләштерә. 2005 йылдың октябрендә Мәскәүҙә үткән саммитта ойошманың генераль секретары Чжан Дэгуан ШОС-тың нефть-газ секторын, углеводородтар запасын разведкалау һәм һыу ресурстарын берлектә файҙаланыуҙы ла индереп, берлектәге энергетика проекттарында иғтибар туплаясағы тураһында белдерә. 2006 йылда Рәсәй Президенты В.В. Путин энергоресурстар етештереүселәрҙе, ҡулланыусыларҙы, транзитерҙарҙы берләштереүсе Энергетика клубы ойоштороу тураһында тәҡдим индерә һәм уны башҡа дәүләттәр етәкселәре лә хуплай. Шулай уҡ Рәсәй ШОС сиктәрендә Ядро яғыулығы циклы хеҙмәттәре буйынса халыҡ-ара үҙәк төҙөргә лә тәҡдим итә. Ҡытай менән Ҡаҙағстан да төбәктә энергетиканы үҫтереү буйынса әүҙем аҙымдар яһай. Ирандың энерготранзитта ҡатнашыу ихтималлығы ла юҡ түгел. Шулай булған осраҡта, ШОС-тың газ баҙарындағы сағыштырма ҡеүәте донъя күләменең яртыһынан артып китәсәк.

2009 йылда Екатеринбургта үткән саммиттан һәм икенсе көнөнә уҡ уҙған БРИК илдәре башлыҡтарының осрашыуынан һуң Рәсәй менән Ҡытай 100 миллиард долларлыҡ энергетика буйынса килешеү төҙөй. Әгәр ошо инициатива тормошҡа ашырылһа, ул Рәсәй-Ҡытай мөнәсәбәттәренә генә түгел, бөтөн донъя сауҙаһына йоғонто яһаясаҡ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аллергик диатез

❖ Лавр япрағы ҡайнатмаһы һәм аптека күмере яҡшы ярҙам итә.

❖ Кесерткән япрағы, мәтрүшкә, эт дегәнәге (череда) үләндәре, аҡ сәскә (ромашка) сәскәһе, бесәй үләне (валериана) һәм татлы тамыр (солодка) тамырҙарын бер тигеҙ күләмдә алып, бергә болғатырға. Бер ҡалаҡ ҡатнашманы 1 стакан ҡайнар һыуҙа төнәтергә, 15 минут һыу ҡайнап ултырған һауытта тоторға һәм 45 минут төнәтергә. Балаларға көнөнә 3-4 тапҡыр 1-әр балғалаҡлап бирергә. Ашаҙан ярты сәғәт алда ҡулланырға. Ошо уҡ үләндәргә сөйәл үләне (чистотел), һары мәтрүшкә һәм бесәй ҡойроғо (шалфей) үләндәре өҫтәп, дауалаусы ванналар яһарға була.

### Тәндә аҡ таптар булһа...

❖ 1 ҡап бор кислотаһы порошогын ванна ҡабул иткәндән һуң еүеш тәнгә, аҡ таптар булған урындарға һөртергә. Был процедураны бер нисә тапҡыр ҡабатларға, тик мотлаҡ рәүештә ваннанан һуң, тирене яҡшылап эҫе һыуҙа йомшартҡандан һуң ҡулланырға. Тәжрибә күрһәтеүенсә, дауаны өс тапҡыр ҡулланыу аҡ таптарҙан ҡотолорға ярҙам итә.

❖ 1 ҡап гидросульфитты 1 литр һыуҙа иретергә һәм 3-4 аҙна дауамында таптарға һөртергә. Был урындарҙы йыумаҫҡа, һөртмәҫкә, гидросульфит үҙе ҡойолоп бөткәнсе тейеш.

### Ауыҙ ҡыуышлығы ауырыуҙары

❖ Каланхоэ һуты менән ингаляциялар һәйбәт. Шулай уҡ теш ҡаҙналары ҡанауы, ҡысыту бөтә, 10-12-се көнгә эренле яралар бөтәшә.

❖ Данияның балалар табибы К. Лунд Аагаард фекеренсә, күп ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән парадонтозды дауалау өсөн прополис ҡулланырға була: көн һайын 1-3 грамм прополисты сәйнәргә, был саҡта бүленеп сыҡҡан төкөрөктө йоторға. Дауаланыу курсы 4-14 көн.

❖ Күп осраҡта календула ярҙам итә. 1 балғалаҡ календуланы 1 стакан һыуҙа төнәтергә, көнөнә бер нисә тапҡыр сайҡатырға.

❖ Көн һайын 2-3 аҙна дауамында төнгөләккә теш ҡаҙналарын һарымһаҡ менән ышҡырға. Ун көндән һуң ял итеп алығыҙ.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Боронғо легенда, риүәйәттәрҙә Ҡытай стенаһы хатта Айҙан да күренә икән, тип ышанһалар, бөгөн уға ышанып булмай, әлбиттә. Ә бына спутниктан төшөрөлгән картала ул айырым-асыҡ ярылып ята - быныһы хаҡ.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# КӘКҮК - ИЗГЕ ҠОШ

**Башҡорттарҙың ышаныуҙары буйынса, кәкүк кешегә генә түгел, тирә-йүндәге бөтөн тереклеккә бәхетһеҙлек килтереүсе. Әгәр ҙә яҙ кәкүк ағастар япраҡ ярмаҫ элек килһә, тәүге тапҡыр ҡысҡырғанда ағастың осона ултырып ҡысҡырһа, йәки тәүге йәшендән алда ҡысҡырһа - йыл ауыр, ҡоро килә, уңыш булмай.**

Әммә этнографик материалдар араһында кәкүк кешене һаҡлап тороусы булараҡ һынландырғандары ла байтаҡ. Әлшәйҙәр кәкүк тәүге тапҡыр ҡысҡырғанда: "Беҙгә бәхет бир!" - тип әйтә. Кәкүк изге хәбәргә ҡысҡыра, тигән ышаныу ҙа бар. Тәүге тапҡыр кәкүк ҡысҡырғанын ишеткәс, кеҫәләренә ҡулыңды тығып: "Аҡсаһы күп булһын", - тип тә әйтәләр икән. Урман ситендә ҡысҡырған кәкүк - байлыҡҡа, тигәнде лә ишеткәнегеҙ барҙыр.

Тәүге тапҡыр кәкүк саҡырғанын ниндәй ҡолаҡ менән ишетеүең дә мәғәнәгә эйә. Урыҫтар, һул ҡолаҡ менән ишетһәң, яҡшыға, ти, башҡорттарҙа уң ҡолаҡ менән ишетеү яҡшыраҡ, бәхеткә була.

*Яуҙан ҡайтҡан сығыңда,*
*Уң ҡолағың ни ерҙә*
*Кәкүк тауышын ишетһә,*
*Шунда ҡышлаҡ төҙөрһөң*, - тип васыят әйтә Иҙеүкәй үҙенең улы Мораҙымға "Иҙеүкәй менән Мораҙым" эпосында.

Европа халыҡтарының донъяның мифологик моделендә уң яҡ - ожмах менән бәйле. Кешенең уң яғындағы фәрештә уны һаҡлап йөрөтөүсе булып иҫәпләнә. Шуға ла уң яғындағы кәкүк тауышы ожмах ҡошо тауышы булып иҫәпләнгән. Ырымбур башҡорттары, кәкүк - ожмахтан сыҡҡан ҡош, ти. Барҙым башҡорттары кәкүкте ныҡ изгеләштерә.

Кәкүктең изге ҡош булыуы шунда ла күренә: башҡорттар кәкүк саҡыра, ти. Йәғни, ул ниндәйҙер вазифаға эйә, изге ҡош, кешеләр менән идара итә ала. Фәрештәләр менән сағыштырылғанға күрә, кәкүк ут тәбиғәтле. Ауылға осоп килһә, янғын булыуы ихтимал, тигән ышаныу бар. Шуның өсөн дә ауылға осоп килгән кәкүккә янған кирбес ташлайҙар.

Кәкүк йәштәргә үҙ ишен табырға ярҙам итеүсе ҡош иҫәпләнә. Әгәр ҙә һөйгәнеңдең кеҫәһенә кәкүк ҡунған ботаҡты һындырып һалһаң, уның һөйөүе тағы ла көсәйә, тип ышанғандар. Ауылға килеп, бер-икене генә ҡысҡырып китһә, ҡыҙҙарҙың сибәр егеткә кейәүгә сығыуына була. Кәкүк ҡатаһы йәки кәкүк ситеге тигән үҫемлек тә кешене үҙенә ҡаратырға ярҙам итеүсе булараҡ ҡабул ителгән.

Кәкүк ағастың аҫҡы ботағына ултырып саҡырһа, уңыш күп була. Кәкүк саҡырғанын уң ҡолағың менән ишетеп ҡалһаң, йыл туҡлыҡлы була. Кәкүк тәүге тапҡыр саҡырғандан һуң һыйырҙарҙың һөтө ике тапҡырға арта. Кәкүк тауышын ишетеп, ергә ҡолап, усыңа эләккән нәмәне ҡарайһың - үлән икән мул уңышҡа, йөн икән, малдың үрсеүенә.

Кәкүкте үлтерергә ярамай, юғиһә, ҡайғы-ҡаза килеүе бар. Әгәр ҙә кемдер ата кәкүкте үлтерһә, ғаиләһендә ир кеше, инә кәкүкте үлтерһә, ҡатын кеше үлә, тип ышаналар. Ошондай уҡ яҙанан ҡурҡып, уның йомортҡаһына ла теймәйҙәр.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

ҺОРАҒЫҘ - ЯУАП БИРӘБЕҘ

# ҠЫТАЙ СТЕНАҺЫН КЕМ ТӨҘӨГӘН?

**"Ҡәҙерле редакция! Тиҙҙән баш ҡалабыҙ Өфөлә ҙур халыҡ-ара йыйын буласаҡ. Унда БРИКС һәм ШОС илдәре вәкилдәре килә, тип яҙаһығыҙ. Мине шул илдәр араһынан бигерәк тә Ҡытай Халыҡ Республикаһы ҡыҙыҡһындыра. Ошо айҡанлы уларҙың боронғо тарихи ҡомартҡы булған Бөйөк Ҡытай стенаһы тураһында бик белгем килә. "Киске Өфө"нө алдырып уҡыйым, рәхмәт, матур материалдар бирәһегеҙ. Минең әлеге һорауға ла яуап бирһәгеҙ, шат булыр инем.**

**Ҡасим Йәһүҙин.**
**Әбйәлил районыҮтәгән ауылы".**

**Гәзит уҡыусыбыҙҙың хатына былтыр Ҡытайҙың Шэньян ҡалаһындағы Ляолинь университетында махсус курста уҡып ҡайтҡан Гөлфиә МӨХӘМӘТШИНАның яуап биреүен һораныҡ.**



- Һуңғы осорҙа Рәсәйҙең Ҡытай Халыҡ Республикаһы менән хеҙмәттәшлеге, дуҫлыҡ бәйләнештәре күҙгә күренеп нығына. Төрлө өлкәләрҙә хеҙмәттәшлек буйынса тиҫтәләгән килешеүҙәргә ҡул ҡуйылған. Башҡортостаныбыҙҙы ла Ҡытай менән күптәнге дуҫлыҡ ептәре бәйләй. Шуларҙың береһе - ике ил араһында юғары уҡыу йорттары студенттары менән алмашыу йолаһы. Былтыр минә Башҡорт дәүләт университетының бер төркөм студенты составында махсус килешеү буйынса Ҡытайҙың Ляолинь университетында уҡып ҡайтыу бәхете тейҙе. Беҙ унда ҡытай телен өйрәнеү буйынса башланғыс әҙерлек курсы үттек. Беҙҙең төркөмдә шулай уҡ Корея, Вьетнам, Япония, Монголия, Франция, Африка, Америка, Англия, Германия, Мысыр илдәренән килгән студенттар ҙа белем алды. Ҡытай студенттары менән дә танышып, дуҫлашып бөттөк. Улар менән аралашыу беҙгә телмәр үҫтереү өсөн бик файҙалы булды. Мин урындағы телмәрҙе мөмкин тиклем яҡшыраҡ өйрәнеү маҡсатында баҙарға ла сыға инем. Йәшелсә, емеш-еләкте нигеҙҙә шунан алыр булдым, сөнки унда һатыусылар менән һөйләшеп-аңлашыуға, туранан-тура аралашыуға форсат тыуа. Бик һәйбәт, асыҡ күңелле, ярҙамсыл халыҡ ҡытайҙар.

Беҙ йәшәгән Шэньян - бик ҙур ҡала, унда 7 миллиондан ашыу халыҡ йәшәй. 30-ҙан ашыу юғары уҡыу йорто һәм колледждар бар, шуға ла уны студенттар ҡалаһы тип тә әйтергә була. Ҡалалағы "China Auto" автомобилдәр эшләү компанияһы билдәлелек яулаған, унан тыш тағы ла резина-техник изделиелар, быяла етештереү, химия сәнәғәте тармаҡтары үҫешкән, шунлыҡтан ҡала халҡының төп өлөшөн эшселәр синыфы биләп тора. Шэньяндың ярлы ғына кварталдарын да күрергә тура килде, шул уҡ ваҡытта үҫешкән, заманса мегаполис булараҡ та һоҡландырҙы ул беҙҙе. Ә шулай ҙа Пекин, Шанхай ҡалаларына етмәй инде, әлбиттә. Әйткәндәй, уҡыуҙан буш ваҡыттарҙа, каникулдарҙа беҙ ятаҡта тик ултырманыҡ, ә төрлө ҡалалар һәм тәбиғәт, архитектура ҡомартҡылары буйлап сәйәхәткә сығып китер булдыҡ. Бындай мөмкинлек тағы ҡасан эләгә әле! Ана шундай бик күп сәфәрҙәребеҙҙең үҙемдә онотолмаҫ тәьҫораттар тыуҙырған ни бары икәүһе хаҡында ғына һөйләп китер инем, сөнки бөтөнөһө хаҡында ла бәйән итеү өсөн гәзиттең бер һаны ғына етмәйәсәк.

Тәүҙә ғүмеремдә тәүге бөйөк артылыш - Хуан Шань тауҙарына менеүебеҙ хаҡында. Һүҙмә-һүҙ тәржемәлә ул "Һары тауҙар" тигәнде аңлата. Ҡытайҙың көнсығыш өлөшөндә Шанхайҙан 300 саҡрым ерҙә урынлашҡан көньяҡ-көнбайыштараҡ ятҡан тауҙар теҙмәһе була ул. 77 түбәһенең бейеклеге 1000 метрҙан юғарыраҡ. Был тауҙар Ҡытайҙың милли паркы һәм кеше иң күп килеүсе туристар төйәге иҫәпләнә. Болоттарҙан аша түбә сөйгән Хуан Шань тауҙарына үрләүе бер ҙә еңел түгел, хатта хәүефле лә, сөнки унда күтәрелә торған баҫҡыстар (шундағы таштарҙан киҫеп, шымартып та, ағастан да яһалған) урыны менән вертикаль рәүештә тора. Ә бит баҫҡыстар тап-тар, уның осо-ҡырыйы юҡ: төрлө рәүештә, төрлө бейеклектә, ағас баҫмалары һелкенеп, бәүелеп торған урындары ла бар, ә аҫҡа ҡараһаң... тәндәр зымбырҙап китә. Шуға ла иң һәйбәте - артҡа ла боролмаҫҡа, аҫҡа ла ҡарамаҫҡа, фәҡәт юғарыға үрмәләргә тура килә...Ошо ҡаялар араһында, яп-яланғас таш араһында беҙҙең яҡтарҙағына оҡшаш ҡарағай, ҡарағастар тырышып-тырмашып үҫеп ултыра. Ослo таш-ҡаялар араһында сыйырсыҡ ояларына оҡшап торған бәләкәй, йыйнаҡ ҡына өйҙәр - ҡунаҡханалар осрай. Хуан Шань тауының түбәһенә күтәрелеү өсөн, иң тәүҙәге канат юлдарын иҫәпләмәгәндә, дүрт сәғәт тирәһе ваҡыт китә. Был тауҙарға менеп төшөү һәр бер ҡытай өсөн оло мәртәбә иҫәпләнә. Беҙҙә лә бит Ирәмәлгә артылыу - изге һәм фарыз ғәмәлдәрҙең береһе, шуның кеүек инде.

Ә хәҙер, бер аҙ көттөрөп булһа ла, хат авторы Ҡасим олатай Йәһүҙиндың үтенесенә күсәйек. Ҡытай стенаһында булыу ҙа Хуан Шань тауҙарына күтәрелгән кеүек үк иҫ киткес тәьҫораттар ҡалдырҙы, сөнки унда йөрөгәндә лә бейек баҫҡыстар буйлап менергә йә, киреһенсә, түбән төшөргә тура килә. Ҡытай стенаһының оҙонлоғо төрлө сығанаҡтарҙа төрлөсә күрһәтелә: тәүҙә мин Википедияла21 мең километрҙан ашыу тигән һанды күреп, аптырашта ҡалғайным, ләкин рәсми сығанаҡтар 8 мең 800 метрҙан ашыу, тип раҫлай. Шул тирә барҙыр, тип уйлайым. Ә бит стенаның башланып киткән урынынан алып иң сикке нөктәһенә тиклем туп-тура үлсәгәндә генә лә 2,5 мең километр тәшкил итә, тиҙәр. Шуға ла уны тиҙ генә иңләп сығыу мөмкин дә түгел, ләкин арҡаларына палаткалар, аҙыҡ-түлек менән тулы рюкзактар артмаҡлаған ҡайһы бер ныҡыш туристар стенаның икенсе осона тиклем барып сығыу маҡсаты ҡуйып юлға сыҡҡан...

Тарихы хаҡында ҡыҫҡаса ғына белешмә: Бөйөк Ҡытай стенаһы - кешелек тарихындағы иң мөһабәт, иң күренекле нығытма ул. Беҙҙең эраға тиклем III быуатта император Цинь Шихуанди етәкселегендә дошман отрядтары тарафынан яһалған туҡтауһыҙ һөжүмдәрҙән һаҡланыу өсөн бөтөн Ҡытай иле ҡатнашлығында оло һәм оҙайлы төҙөлөш башлана. Стена Шаньхай-гуань ҡалаһынан алып тау теҙмәләре аша әкиәттәге йылан шикелле борғолана-борғолана, ярты Ҡытайҙың сиге буйлап үтеп, иң осо Цзяюйгуань тигән ҡалаға килеп етеп тамамлана. Стенаның киңлеге 5-8 метрға етә, бейеклеге 7 -10 метр тирәһе урындар бар. Бөйөк стенаның иң бейек нөктәһе 1.534 метр, Пекиндан алыҫ түгел ерҙә урынлашҡан, ә иң түбән нөктәһе диңгеҙ кимәле менән бертиң һәм Лаолонгту тигән ҡалаға яҡын.

Боронғо легенда, риүәйәттәрҙә Ҡытай стенаһы хатта Айҙан да күренә икән, тип ышанһалар, бөгөн уға ышанып булмай, әлбиттә. Ә бына спутниктан төшөрөлгән картала ул айырым-асыҡ ярылып ята - быныһы хаҡ. Хат авторы, стенаны төҙөгәндә ниндәй цемент ҡулландылар икән, тип һорай. Беҙгә иһә, йышып, шымартылған ҙур-ҙур таш блоктарҙы бер-береһе менән нығытып стена һалғанда дөгө онона эҙбиз ҡушып яһалған махсус иҙмә файҙаланғандар, тип аңлаттылар. Төҙөлөш материалдарын ташыу, тау башына мендереү өсөн махсус ҡул арбалары, башҡа ҡулайламалар уйлап сығарған ҡытайҙар.

Шуныһын да әйтмәй булмай: был архитектура ҡомартҡыһы донъяла иң оҙон нығытма ғына түгел, ә иң оҙон зыярат та ул. Уны төҙөүҙә миллиардлаған кеше: тыныс ваҡыттарҙа император ғәскәрҙәре, ябай эшселәр, крәҫтиәндәр, эшһеҙҙәр, енәйәтселәр ҡатнашҡан. Дөрөҫөн әйткәндә, стена

уны тәҙөүҙә ҡатнашҡан миллиондарҙың һөйәге өҫтөндә ултыра, тигән билдәле лаҡап йөшәй.

Ҡытай стенаһы нисә йыл тәҙөлгән, тип һорау, миненсә, бигүк дөрөҫ булмайҙыр, сөнки ул быуаттар буйына тәҙөлгән, элегерәк тәҙөлгән өлөштәре емерелгән - улары ҡайтанан аяҡҡа баҫтырылған, ремонт һәм яңыртыу эштәре алып барылған - ҡыҫҡаһы, ул ғүмер буйы тәҙөлгән һәм әле лә тәҙөлә, яңыртыла. Әлеге көндә лә Ҡытай хөкүмәте был тарихи архитектура объектын һаҡлау, уны тәртиптә тотоу өсөн йыл һайын миллиардлаған доллар аҡса бүлә, сөнки милли ғорурлыҡ символы булған был ҡомартҡыны килер быуындарҙың да күреп-белеп үҫеүен теләй.

Ҡытай хаҡында бер һөйләй башлаһаң, туҡтауы шулай еңелдән түгел шул: боронғо ла, бай ҙа, ифрат ҡыҙыҡлы ла ил бит ул. Ҡытайҙа йөрөһәм дә, мин, ниңәлер, һәр саҡ үҙебеҙҙең Башҡортостанды уйлап, һағынып йөрөгәнгә күрәме, уртаҡ йолалар һәм традицияларға нығыраҡ иғтибар итә инем. Ана шундай уртаҡлыҡтың береһе - сәй темаһы. Беҙҙең халыҡ та сәй эсергә ярата бит. Ләкин бына сәйҙең ысын тәмен, сәй эсеү йолаһының нескәлектәрен мин Ҡытайҙа ғына белдем. Мәғлүм булыуынса, был ил борон-борондан сәйе менән дан тота. Унда сәй эсергә яратып ҡына ҡалмайҙар, уны үҙҙәре үҫтерәләр һәм эшкәртәләр ҙә. Мин элек үҙебеҙҙә ҡара һәм йәшел сәйҙәр генә була тип уйлап йөрөһәм, бында килгәс, уларҙың төрлөлөгөнә хайран ҡалдым: йәшел (люй ча), ҡыҙыл (беҙҙенсә ҡара - хун ча), аҡ (бай ча), һары (хуан ча), пуэр (хэй ча) һәм улун-улун тигән сәй сорттары бар икәнлеген күреп кенә түгел, тәмләп тә белдем. Бик ҙур сәй баҙарҙары, бәләкәй генә сәй кибеттәре, сәйханалар күп. Сәй һатып алырға инһәң, унан тиҙ генә сығып китермен, тимә. Һине күптәнге таныштарылай күреп, яҡты йөҙ менән йылы ҡаршылайҙар. Әйҙүкләп, сәй эсергә ултырталар. Бәләкәй генә кәсәләргә яһап, төрлө сорттарын тәмләтәләр. Был осраҡта сәйҙән баш тартып сығып китеү унайһыҙ ғына түгел, тәрбиәһеҙлек, тип ҡабул ителеүе лә бар. Тәмләп ҡарап, тотош сәй церемонияһына тамаша ҡылғас ҡына үҙеңә оҡшағанын һатып алаһың. Юғиһә, тәмен белмәй алып, аҙаҡ уның оҡшамауы ла бар. Мәҫәлән, пуэр күптәргә оҡшай, тик әсәйемә ул түгел, ә ҡыҙыл, йәшел сәйҙәр оҡшаны. Ә бит пуэр иң ҡиммәтле сәй иҫәпләнә, сөнки ул пресланған килеш оҙаҡ ваҡыт ферментланып махсус һаҡлауҙа ята. Ни тиклем оҙаҡ һаҡланһа, бағаһы ла шул тиклем юғары була.

Былар Ҡытайҙа үткән бер йылдың бер нисә иҫтәлеге генә. Был сәйәхәт итеп, сәй эсеп тик йөрөгән икән унда, тип уйлап ҡуймағыҙ тағы. Уҡыуыбыҙ хаҡында ла бер кәлимә һүҙ әйтеү кәрәктер, тим шуға күрә. Ҡытай телен өйрәнеүе еңелдән түгел, әлбиттә, ләкин тырышҡанда бер йылда ла күп нәмәгә өлгәшеп булыуын аңланым. Телмәр үҫтереүгә, әйткәнемсә, урындағы халыҡ менән дә, студенттар менән дә аралашыу барышында өлгәшеп булһа, ҡытайса уҡыу, айырыуса яҙыу - үҙе бер сәнғәт тә, ҙур тырышлыҡ та талап итә. Бер иероглиф йә ижеккә тәшкән баҫым йәки һыҙыҡса ғына ла әллә күпме мәғәнә аңлата. Шуға күрә, өйрәнә башлаған саҡта иероглиф һүрәтләнешен һәм уның мәғәнәләрен ассоциатив күҙаллауҙар ярҙамында иҫтә ҡалдырырға тырыштым. Иероглифтарҙы яҙыу, әйтеүемсә, рәсем дәресенә оҡшаш. Яҙырға өйрәнеүгә лә байтаҡ ваҡыт китә. Минә йыш ҡына, артабан ҡытай теле буйынса белгес булырға уйламаһаң, уны өйрәнәм тип нинә шулай яфаланырға һуң, тип әйтәләр. Ә миненсә, донъя халыҡтары телдәрен белеү бер кемгә лә ҡамасауламай. Был хәтерҙе, мейе эшмәкәрлеген яҡшыртыуға ғына булышлыҡ итеп ҡалмай, яңы дуҫтар табырға ла ярҙам итә. Ҡытайҙа дуҫтарым күп хәҙер, шуға һөйөнәм. Әйтәләр бит: күпме тел беләһең, шул ҡәҙәре байыраҡ булаһың, тип.Ҡайһы илгә барһаң да, шундағы халыҡтар телен белеү кешегә урындағыларҙың ихтирамын яуларға ярҙам итә, аралашыуҙы ихласыраҡ, ышаныслыраҡ йүнәлешкә көйләй. Күп телдәр белеүҙең өҫтөнлөгөн мин шунда күрҙем.

ТАРИХЫҢДЫ ТАНЫТ...

# НУҒАЙ ХАНЫ ТОРАХАН

## Ул ҡыш көнө - Өфөлә, йәй Дим буйында көн иткән

**XVIII - XIX быуат рус ғалимдары үҙҙәренең хеҙмәттәрендә баш ҡалабыҙ Өфө тураһында байтаҡ ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр килтерә. Шул ғалимдарҙың береһе - күренекле рус тарихсыһы, географы, иҡтисадсы һәм этнографы Петр Иванович Рычков (1712 - 1777).**

П.И. Рычков Башҡортостанға 1734 йылда Ырымбур экспедицияһы составында бухгалтер булараҡ килә. Һуңғараҡ ул Ырымбур губернаһының ҙур чиновниктарының береһе булып китә. Эшенән буш ваҡытта Рычков киң ғилми тикшеренеүҙәр алып бара: уның күп һанлы мәҡәләләре Рәсәйҙең төп фәнни журналдарында донъя күрә. Уңышлы ғилми эшмәкәрлеге өсөн Петр Иванович Рычков 1759 йылда Петербург Фәндәр академияһының беренсе ағза-корреспонденты итеп һайлана, ә 1765 йылда Иреккә иҡтисад йәмғиәтенең (Вольное экономическое общество) ағзаһы булып тора.

Өфө ҡалаһы тураһында П.И. Рычков үҙенең "Ырымбур тарихы" ("История Оренбургская", 1759) һәм "Ырымбур губернаһы топографияһы" ("Топография Оренбургской губернии", 1762) тигән иң билдәле хеҙмәттәрендә яҙып китә. Әгәр автор "Ырымбур тарихы"нда Өфө тураһында ҡыҫҡаса ғына мәғлүмәт килтерһә, "Ырымбур губернаһы топографияһы"нда Өфөгә айырым "О городе Уфе и о всей Уфимской провинции" тигән бүлек бағышлай.

Ул бүлектә Рычков былай тип яҙа: "Өфө ҡалаһы батша һәм бөйөк кенәз Иоанн Васильевич ваҡытында һалынған... Ул ҡала Ағиҙел йылғаһы ағышының уң яғында урынлашҡан... Өфө исеменә ҡарағанда, шуны төшөнөп була: был исем яңы ҡушылмаған, ә боронғо атаманы ҡабатлай, был ерҙә элек йәшәгән нуғай хандары ҡалаһының исеме лә шулай (Өфө - **А.П.**) булған".

П.И. Рычков Нуғай юлының Ҡаратабын улысы башҡорт старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаев менән осраша. Муллаҡаев Рычковҡа Башҡортостан, башҡорттар тарихы тураһында һөйләй. Һәм был мәғлүмәттәрҙе П.И. Рычков "Ырымбур губернаһы топографияһы"на, Өфөгә бағышланған бүлеккә индерә: "Атаҡлы башҡорт старшинаһы... Ҡыҙрас Муллаҡаев шуны белдерҙе: Ҡазан ханлығы һәм башҡорттар Рәсәй дәүләтенә буйһонғанға тиклем, нәҡ Өфө ҡалаһы торған урында борон ук саҡрымға һуҙылған ҙур ҡала булған. Ул ҡаланың һуңғы хужаһы нуғай ханы Торахан булған. Торахан ҡалала ҡыш көнө генә йәшәгән, ә йәй көндәрендә Өфөнән 50 саҡырым самаһы алыҫлыҡта - Дим буйында көн иткән... Торахандың ҡул аҫтында нуғайҙар һәм ун ике меңдәр улысы башҡорттары була".

П.И. Рычков Өфөнө уратып алған тәбиғәт, ҡалала йәшәгән халыҡтар, ундағы соборҙар, ҡаланы һаҡлау ҡоролмалары тураһында ла әйтеп үтә. Шулай уҡ был бүлектә Бөрө, Миңзәлә ҡалалары һәм улар тирәһендәге нығытмаларҙы ла тасуирлай.

Әйтергә кәрәк, П.И. Рычковтың "Ырымбур тарихы" һәм "Ырымбур губернаһы топографияһы" хеҙмәттәре бөгөн дә әһәмиәтен юғалтмаған. Шуға күрә Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө фәнни үҙәгенең Этнология тикшеренеүҙәр үҙәге был китаптарҙы - "Ырымбур топографияһы"н - 1999, "Ырымбур тарихы"н 2000 йылдарҙа - аңлатмалар менән нәшер итте.

Шулай итеп, Петербург Фәндәр академияһының ағза-корреспонденты Петр Иванович Рычковтың ғилми хеҙмәттәре лә Өфө тарихын рус дәүере менән генә сикләмәй, ә унда борондан ошо уҡ исемле Өфө ҡалаһы булған тип иҫбатлай.

**Айбулат ПСӘНЧИН,**
**география фәндәре докторы.**



П.И. Рычков.



Өфөнөң һүрәте (П.И. Рычков уны 1744 йылда ҡәләм менән төшөргән).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Башҡорттарҙың этногенезы мәсьәләләре

Көньяҡ морфологик айырмалыҡтың (диалекттың) үҙенсәлеге түбәндәгегә ҡайтып ҡала. Һанап үтелгән 9 аффикстың күплек ялғауы, исемдәрҙән ҡылым яһаусы аффикстар, исемдәрҙән һүҙ яһаусы аффикстар, ҡылымдарҙан һүҙ яһаусы аффикстар күпселек осраҡта ике төрлө: әгәр һүҙҙәр *м, н, ң* хәрефтәренә бөтһә, ялғау н-ға башлана, башҡа өндәрҙән һуң ялғау *л*-дан башлана. Башҡа барлыҡ аффикстар: килеш ялғауҙары, исем, ҡылым яһаусы ялғауҙар, бойороҡ һөйкәлеше, рәүеш, киҫәксә һәм дөйөм ялғауҙар - төньяҡ-көнсығыш морфологик диалекттағы кеүек уҡ дүрт типлы.

Төньяҡ-көнбайыш морфологик диалектының һиҙелерлек айырмалыҡтары түбәндәгесә. Күплек ялғауы, шулай уҡ аффикстарҙың исем, сифат, ҡылым яһаусы ялғауҙар һәм бойороҡ һөйкәлеше, көньяҡ диалекттағы кеүек, тартынҡыларҙы ассимиляциялауҙың ике тибында ҡулланыла. Йәғни, әгәр һүҙҙәр *м, н, ң* хәрефтәренә бөтһә, ялғау *н*-ға башлана, башҡа өндәрҙән һуң ялғау *л*-дан башлана. Килеш ялғауҙары үҙенсәлекле форма ала, башҡалары өс типлы формала.

Башҡорт теленең лексик байлығы, бигерәк тә һүҙлек айырмалығы булған диалекттар киҫелешендә бик насар өйрәнелгән. Шул уҡ башҡорт теленең фонетик һәм морфологик үҙенсәлектәрен ҡыҫҡаса ҡарап сыҡҡанда уның урындағы диалект айырмалыҡтары күҙгә салына.

### Йомғаҡлау

Бөйөк Октябрь социалистик революцияһы еңгәндән һуң 1917 йылдың 26 октябрендә (8 ноябрь) Башҡортостанда Өфө большевиктар комитеты етәкселегендә совет власы урынлаштырыла. Әммә ул ныҡлап урынлашһын өсөн ике йыл ваҡыт үтә.

1919 йылдың 23 мартында В. И. Ленин менән И. В. Сталин 20 мартта ҡултамға ҡуйған Рәсәй Федерацияһы составында Кесе, йәғни көньяҡ-көнбайыш Башҡортостан сиктәрендә үҙәге Стәрлетамаҡта булған Башҡорт АССР-ы ойошторолоуы тураһындағы ВЦИК декреты донъя күрә. БАССР ойошторолоуы башҡорт халҡы тарихында бөйөк ваҡиға була. Үҙенең күп быуатлыҡ тарихында башҡорттар беренсе тапҡыр башында хеҙмәтсән халыҡ вәкилдәре торған һәм эксплуатацияға, йәберләүҙәргә урын булмаған милли дәүләтселеген тәҙөү хоҡуғы ала.

Һуғышҡа тиклемге биш йыллыҡтарҙа КПСС етәкселегендә Башҡортостан ҡеүәтле индустриаль-аграр республикаға әүерелә. Башҡорттар араһынан квалификациялы хеҙмәткәрҙәр һәм техник интеллигенция вәкилдәре сыға. Совет власы йылдарында ауыл халҡының тормошо ла тамырынан үҙгәрә.

Түбәндә һүҙ барасаҡ хәҙерге башҡорттарҙың көнкүреше менән мин 1952 йылда СССР Фәндәр академияһының Башҡортостан филиалы Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының экспедициялары ваҡытында Дүртөйлө (елдәк ырыуы), Ҡырмыҫҡалы (кәлсер-табын), Стәрлебаш (тәлтем-юрматы), Федоровка (бөрйән), Маҡар (юрматы), Бөрйән (гәрәй-ҡыпсаҡ), Белорет (инйәр-ҡатай), Учалы (ҡубәләк-теләү), Әбйәлил (тамьян-түңгәүер, бөрйән), Баймаҡ (бөрйән), Матрай (түңгәүер), Ейәнсура (үҫәргән), Күгәрсен (ҡара-ҡыпсаҡ), Йомағужа (бушман-ҡыпсаҡ), Мәләүез (бөрйән) районы тарында таныштым.

**Журналистарҙың геройҙары менән шундай бер әңгәмә ҡороу алымы бар: әйтәйек, билдәле композитор менән әңгәмәләшкәндә - музыка тураһында, спортсы менән аралашҡанда уның эшмәкәрлек даирәһе хаҡында бер һүҙ ҙә ҡыҫтырылмай. Бындай алым һәр ваҡыт ҡыҙыҡлы һөҙөмтә бирә - билдәле кеше бөтөнләй икенсе яҡтан асыла. Ләкин мэр менән ҡала хаҡында бер генә һүҙ менән дә телгә алмайынса һөйләшеүҙе күҙ алдына килтереүе ҡыйын һымаҡ. Сөнки асаба өфөлө Ирек Ялалов өсөн ҡала эшмәкәрлек өлкәһенә ҡарағанда күпкә ҙурыраҡ урын алып тора. Ул - уның тормошо. Ирек Ишмөхәмәт улы менән билдәгән вазифаһына ҡағылмай йәки бары тик мэр булараҡ ҡына һөйләшергә тырышыу уңышһыҙлыҡҡа дусар булыр ине, моғайын. Шуға ла әңгәмәлә уның был ике асылы бер-береһенә тығыҙ бәйләнгән. Әйткәндәй, Ялалов-өфөлө менән Ялалов-мэр бер-береһе менән бәхәсләшмәйме икән? Был хаҡта саҡ ҡына һуңыраҡ. Ә хәҙер...**

**▸ Ирек Ишмөхәмәт улы, халыҡ телендә "Себер характеры" тигән ҡылыҡһырлама бар, йыш ҡына "ысын мәскәүле" йәки "ысын санкт-петербурглы" тигәнде лә ишетәбеҙ... Ә өфөлө характеры бармы һәм ул ниндәйерәк?**

- Ниндәйҙер берҙәм, дөйөм генә өфөлө образы барыбер юҡтыр, тип уйлайым. Әйҙәгеҙ, иҫкә төшөрәйек, ҡасандыр Өфө, Черниковка булған һәм һыҙатты билдәләр инем: өфөләр бөтөн нәмәне аныҡ эш буйынса баһалай. Халыҡсан итеп әйткәндә, уны буш һүҙ менән генә туйҙырып булмай. Ялтырауыҡлы белдереүҙәр, лозунгылар менән башын ҡатырырмын, тимә. Әгәр ул үҙ территорияһында саҡ ҡына яҡшы яҡҡа үҙгәреш күрһә лә урындағы үҙидара органдарына ышана.

Йәғни, характер бар. Һәм ул бер ҡаҙандағы ҡатышманы хәкеренә толерантлыраҡ була башланым. Бөгөн кешеләргә бынан 30 йыл элеккегә ҡарағанда һаҡсылыраҡ мөнәсәбәттәмен. Ҡырҡа киҫмәйем. Беренсе фекер иң йөғонтоло тиһәләр ҙә, кеше тураһында ашығыс һығымта яһамайым. Тәүге тәьҫораттар алдаҡ булыуы ла мөмкин. Кешене аныҡ эштәре һәм ғәмәлдәре буйынса баһаларға кәрәк икәнен аңлайым.

ауыр хәл-торош күҙәтелә, инженер коммуникациялары, селтәрҙәр бик ныҡ туҙған. Һәм, моғайын, һуңынан ҡала менән етәкселек итергә тарихи, юридик, гуманитар белеме булған кешеләр килергә тейештәр. Әммә бының өсөн мегаполис етәксеһенә күберәк ижади эштәр менән шөғөлләнеү мөмкинлеген биргән ныҡлы каркас булдырырға кәрәк. Әлеге ваҡытта ҡаланың инженер коммуникацияларында йылына биш мең ярым етди ватылыу була икән, етерлек булмаған финанс ресурстары шарттарында ҡатмарлы инженер мәсьәләләрен хәл итергә, ғәҙәти булмаған юлдар табырға тура килә. Бында барыһын да белгестәргә профессионаллеге хәл итә.

**▸ "Кешеләрҙе күберәк белгән һайын, эттәрҙе ныҡыраҡ яратам", - тигән әйтемгә ниндәй мөнәсәбәттәһегеҙ?**

кем менәндер һуғышҡан!.. Беҙҙең заманда 200 кеше 200 кешегә ҡаршы сыға торғайны. Балалар ғына яҡшыраҡ һәм гуманлыраҡ тип уйламайым. Мин бында тотош йәмғиәттең үҫеше тураһында әйтер инем. Тормош кимәле, мәҙәниәт кимәле үҙгәрә. Беҙҙең заманда ниндәй күңел асыу мөмкинлеге бар ине? Ихата, велосипед һәм әллә күпме буш ваҡыт. Хәҙер балалар шул тиклем белем менән баҫылған, улар... изге һәм алсаҡ булыуға дусар ителгән.

**▸ Һеҙҙең рәхәтләнеп, көсөргәнештән арынып һөйләшеп ултырған иң яҡын дуҫтарығыҙ барҙыр. Улар кем? Аныҡ кемдәр түгел, ә ниндәй һөнәр кешеләре? Уларҙың эше тураһында һөйләшәһегеҙме?**

- Улар абруйлы, үҙ юлын тапҡан, ихтирам яулаған кешеләр. Һөнәрҙәреме? Туҡһан

# "ӨФӨ... ҮҘЕНӘ ОҠШАҒАН.

уларҙы проспект тоташтырған. Әйткәндәй, беҙ бит "Октябрь проспекты" тимәнек, сөнки проспект бөрәү генә булды һәм һүҙ нимә хаҡында барғанын барыһы ла аңлап торҙо. Бынан тыш, Иҫке Өфө һәм Дим бар ине. Йәғни, ҡала бит компактлы ғына үҫешмәгән, шуға ла өфөлө характеры тураһында һүҙ йөрөтөү ҡыйыныраҡтыр. Черниковканы алып ҡараһаҡ, уның үҙенең айырым колориты, үҙенең үҙенсәлекле характеры бар. Һәм сәнәғәт производствоһы күләме кәмемәүгә ҡарамаҫтан, яңы технологиялар индереү һөҙөмтәһендә эшсе синыф вәкилдәре һаны кәмей бара. Әммә техник интеллигенция вәкилдәре йәшәгән район һәр саҡ булды. Һүҙ һигеҙ ҡатлы йорттар зонаһы хаҡында. Проспект - ҡаланың Совет, Октябрь, Орджоникидзе райондары ингән өлөшө. Образлы итеп әйткәндә, был тормош ҡайнаған суйын.

Өфөнөң көньяҡ, тарихи өлөшө - бында, әлбиттә, бөтөнләй икенсе характер. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында Одессанан, Ленинградтан, Мәскәүҙән, Киевтан эвакуацияланған зыялыларҙың күпселеге ошонда ҡалып, кире ҡайтмай, үҙҙәренең ҡеүәте, белеме, таланты менән ижади, мәҙәни мөхитте байыта. Әлбиттә, бындағы өфөлө бөтөнләй башҡа. Шуға күрә, һәр районды, урындағы халыҡтың менталитеты тураһында оҙаҡ һөйләргә мөмкин. Әммә мин һорауығыҙға шулай тип яуап бирәм: өфөләрҙең төп һыҙаты - эшһөйәрлек һәм изгелеклелек. Өфөләр Рәсәйҙең башҡа ҡалаларында йәшәүселәр кеүек бик йыш йылмаймайҙар ҙа, ләкин улар менән һөйләшә башлаһаң һәм уларҙың ышанысын яулаһаң, уларҙың күңеле тулы изгелек икәнен бик тиҙ күрәһең. Мин тағы ла бер терләтә: унда беҙҙең тамырҙар ҙа, тарих та, башҡа ҡалаларҙан килгән ижади, техник зыялыларҙың мәҙәниәте лә бергә буталған. Ә бит һуғыш, һуғыштан һуңғы йылдарҙа улар 300 мең самаһы кеше булған. Һуңынан Өфө характеры артабан формалашҡан, камиллашҡан, үҙгәргән...

**▸ Ирек Ишмөхәмәт улы, Һеҙҙең вазифалағы кеше ҙур эмоциональ баҫым кисерә. Нимәне күҙ уңында тотаммы? Бер яҡтан, маҡталаһығыҙ, шул уҡ ваҡытта тәнҡиттән, кире хис-тойғоларҙан да азат түгелһегеҙ. Был кешегә йоғонто яһамай ҡалмай. Ҡала хакимиәте башлығы вазифаһында эшләү йылдарында үҙгәрҙегеҙме?**

- Мин һәр саҡ кәрәгенсә ҡаты кеше булдым. Характер формалашыуға, әлбиттә, классик, хәҙергесә әйткәндә, грекрим көрәше менән шөғөлләнеүем йөғонто яһаны. Тормошта ла, келәмдә алышҡан кеүек, һәр саҡ үҙ көсөмә генә ышанырға өйрәнгәнмен.

Белем усағынан да уңдым - ул математика йүнәлешендәге иң көслө 114-се мәктәп ине. Уны тамамлаусылар илдең алдынғы вуздарына уҡырға инде һәм инә. Һуңынан - нефть институты, артабан... Беренсе йылда уҡ 100-ҙән ашыу кешелек коллективтың етәксеһе булдым. Үҙемде белгәндән алып етәксе урындарҙамын: бәләкәй, урта, ҙур. Һәр саҡ ниндәйҙер коллектив менән етәкселек иттем. Шул иҫәптән хатта "химиктар", йәғни хөкөм ителеүселәр коллективын да етәкләргә тура килде. Унда ни тиклем ныҡлы һәм ҡаты характерға эйә булырға кәрәклеге тураһында аңлатып тороу артыҡтыр.

Әммә... Эйе, һуңғы дүрт йылда характерым үҙгәрҙе. Мин йомшағыраҡ, ситтәр фе-

**▸ Кешеләрҙән йыш алданаһығыҙмы?**

- Бик йыш.

**▸ Йәғни, тәүге тәьҫоратығыҙға ышанмайһығыҙ?**

- Юҡ, ниңә ышанмайым ти... Кеше менән бер-ике сәғәт һөйләшеп ултырғандан һуң уның характеры тураһында фекер йөрөтә алам, әлбиттә. Әммә шулай ҙа була бит: кешенең характеры бик яҡшы булмаҫҡа мөмкин, уның ҡарауы, ул үҙенең инженер йәки ойоштороусы эшен яҡшы белә. Был осраҡта уға нимәнелер ғәфү итәһең. Әлбиттә, һүҙ етди тәртип боҙоу тураһында түгел, ә тап характер һыҙаттары, асылы тураһында. Йәки - киреһенсә. Кем менәндер һөйләшәһең - шәп кеше инде бына, ә белгес булараҡ йүнһеҙ...

**▸ Һеҙ характеры насар булһа ла яҡшы белгесте һайлаясаҡһығыҙмы?**

- Бөтөн нәмәне лә ҡапмаҡаршы ҡуймаҫ инем... Беләһегеҙме, ҡала һәм ҡала хужалығы - ул аныҡ эш. Әгәр халыҡтың тормошон тәьмин итеүсе объекттар идаралығы системаһында йәки социаль тармаҡта өҙөклөк барлыҡҡа килә икән, ҡала өсөн уның эҙемтәләре ауыр буласаҡ. Минең өсөн эш һәм уның һөҙөмтәһе мөһим, һәм бында мин кешелек асылының ҡайһы бер етешһеҙлектәренә күҙ йоморға ла әҙермен.

**▸ Бөгөн ҡалалар менән идара итеү системаһында ниндәй белемле, ниндәй кешеләр эшләргә тейеш?**

- Яҡындағы 20-30 йылда - был Өфөгә генә ҡағылмай - Рәсәй ҡалалары менән идара итеү системаһында инженерҙар, инженер белеме булған кешеләр эшләргә тейеш. Сөнки тотош ҡала хужалығында бик

- Ҡәтғи рәүештә риза түгелмен. Ниндәй генә ауыр һәм төрлө булмайыҡ, йылдар үткән һайын һәр ҡайһыбыҙ аҡыллыраҡ була бара, башҡаларҙы, уларҙың ҡылығын аңлап ҡабул итә. Юҡ, мин был сағыштырыу яҡлы түгел.

**▸ Кемде ныҡыраҡ яратаһығыҙ: балаларҙы, йәштәрҙе, урта йәштәгеләрҙе, ололарҙымы?**

- Күп кеше менән аралашам, һәм ниндәйҙер бер категорияны айырып билдәләй алмайым. Барыһы ла кешенән тора.

**▸ Ирек Ишмөхәмәт улы, миңдә, хәҙерге үҫмерҙәр беҙҙең быуынға ҡарағанда гуманлыраҡ, тигән тойғо тыуҙы. Улым баскетбол йәки футбол тубын ала ла, уйын майҙансығы яҡшыраҡ булған ергә, ҡаланың икенсе осона китә. "Ә урындағы малайҙар менән низағлашып китмәйһегеҙме?" тип аптырап һорайым. Юҡ, улар ҙа сыға, бергәләп уйнайбыҙ, ти. Ә беҙҙең заманда бит сит ихатала күҙ күгәртеп ҡайтырға ла тура килә ине...**

- Бында йәштәр мәҙәниәтенең ҡеүәтле трансформацияһы тураһында һөйләү урынлылыр тип уйлайым. Мин барыһын да яҡшы иҫләйем. Аҙнаһына алты тапҡыр Дан бульварынан Гастеллоға күнекмәләргә йөрөй инем, күпме ихатала булдым. Спорт менән шөғөлләнеүселәр бер-береһенә ярҙам итә. Әгәр ниндәйҙер ихатала беҙҙең секцияла йөрөгән малай йәшәһә, унда низағтар булмай ине. Әлбиттә, ихатаға, районға бүлеү булды. Хәҙер ҙә шундай тиҫтәләрсә атама иҫтә. Ысынлап та, кемдер сит ихатанан күҙен дә күгәртеп ҡайтыр ине. Былар ул замандың үҫмерҙәр субмәҙәниәте элементы. Хәҙер яңылыҡтарҙы уҡыйым: кемдер

проценты - медиктар. Бала саҡ, студент йылдары дуҫтарым.

**▸ Һеҙҙең үҙегеҙҙе лә медицина ылыҡтырманымы?**

- Юҡ. Ул тармаҡ минеке түгел. Бала саҡтан, үҙемде беләбелгәндән алып нимәләр төҙөнөм. Хатта өйҙәр, һарайҙар төшөргән, ниндәйҙер эскиздар һыҙғылаған бала саҡ дәфтәрем әле лә һаҡлана. Минең кредом - идара итеү һәм инженерия.

**▸ Кем яҡыныраҡ - синыфташтармы, институтта бергә уҡығандармы?**

- Башҡалар үпкәләмәһен: синыфташтар.

**▸ Донъяның төрлө ҡалаларында булдығыҙ. Һеҙҙенсә, уларҙың ҡайһыһы Өфөгә оҡшаған? Һәм Өфөнөң ниндәй ҡалаға оҡшаған булыуын теләр инегеҙ?**

- Ҡалабыҙ нимәһе менәндер Белградты хәтерләтә. Шулай уҡ Өфөнөң ландшафты, төҙөлөшө буйынса Швейцарияның ҡайһы бер ҡалалары менән оҡшашлығын күрәм. Әйткәндәй, Швейцарияла, иң бай илдәрҙең береһендә, төҙөлөш бик ябай һәм улар архитектура гәүһәрҙәренең күплеге менән маҡтана алмай. Минимализм, сиклелек булған протестант мәҙәниәте үҙен һиҙҙертә.

Рәсәй ҡалаларынан беҙгә Волга буйы һәм Урал федераль округы ҡалалары яҡыныраҡ. Беҙ, нисектер, бер-беребеҙгә оҡшағанбыҙ. Черниковка урамынан үтеп китәһең һәм ҡаланың был өлөшөн ни яғы менәндер Силәбе, Екатеринбург ҡалаларына оҡшатаһың. Көньяҡ өлөштә нимәләр Ырымбур, Ҡазан, Силәбене күҙ алдына баҫтыра...

Бөгөн беҙ Өфөнөң иртәгәһен формалаштырыу өҫтөндә эшләйбеҙ, үҙ юлыбыҙҙы эҙ-

✓ ***Әгәр шундай маршрут буйынса үтһәгеҙ, элек белмәгән Өфөнө күрәсәкһегеҙ. Һәм ҡондоҙҙарҙы, төлкөләрҙе, ҡуяндарҙы, хатта уңыш йылмайһа, ҡабандарҙы һәм мышыларҙы күрергә мөмкин.***



# Ә БЫЛ ИҢ МӨҺИМЕ!"



лəйбеҙ. Быйыл алдағы йылдарға ҡаланы үҫтереү стратегияһы әҙерләнәсәк, унда Башҡортостандың баш ҡалаһы нисек буласағы асыҡ күренәсәк. Әле үк ҡайһы бер юлдарҙы күҙаллайбыҙ. Өс йыл эсендә 21 парк һәм сквер эшләнек. Был һуңғы 20 йылда эшләнгәнгә ҡарағанда күберәк. Әлбиттә, Өфө фрагментар рәүештә яҡшыра, үҙгәрә. Хәҙер беҙ йылына 500-гә тиклем капиталь төҙөлөш объекты күтәрәбеҙ. Өс йыл ярым элек был һан 200 ине. Әле һәр объектҡа архитектура, төҙөкләндереү йәһәтенән талаптар бик ҡаты. Һәр объект - ҡаланың буласаҡ имиджының бер өлөшө.

▸ **Шулай ҙа Өфөнөң ниндәй ҡалаға оҡшауын теләр инегеҙ?**

- Беләһегеҙме, мин хатта Европаның йәки Азияның иң яҡшы мегаполистарында ла әллә күпме етешһеҙлек табам. Бары тик туристик маршруттан ситкә сығып, 200-300 метр ситкә китәм дә, барлыҡ "матурлыҡты" күрәм... Бер генә етешһеҙлеге лә булмаған бер генә ҡала ла юҡ. Һәм донъяның бер генә иле лә ташлама булып тормай. Америка ҡалаһы булһынмы ул, Ҡытай ҡалаһымы... Был ғәҙәти. Тотош Өфө - ул 720 квадрат километр һәм ул тотошлайы менән Ленин урамы йәки Ҡунаҡһарай кеүек була алмай...

▸ **Барыһы ла сағыштырып ҡарағанда асыҡлана. Йылға круизы ваҡытында Волга буйы федераль округының ҡайһы бер ҡалаларында булғандан һуң Өфөнө бысраҡ йәки ҡотһоҙ ҡала тип әйтергә тел әйләнмәй...**

- Бер ваҡытта ла, бер ҡаланы ла тәнҡитләмәйәсәкмен. Сәбәбе бер генә - кемгәлер уңыш йылмайған: сәнәғәт, предприятиелар, үсеш динамикаһы бар, ә кемдер транспорт коммуникацияһы ситенә тура килгән, һ.б. "О, унда мэр аҡыл эйәһе. Бына ул нимәгә өлгәшкән!" - тип әйтеүе еңел. Иң мөһиме, ҡалабыҙ тормошонда мираҫҡа нимә ҡалған һәм ошо мираҫты юҡҡа сығармайынса, яҡшыртыу, арттырыу өсөн үҙең нимә эшләгәнһең... Өфө - Рәсәйҙең иң таҙа ҡалаларының береһе, был минең генә фекерем түгел, был хакта коллегаларымдан да, башҡа ҡалалар етәкселәренән дә күп тапҡырҙар ишеттем. Беҙҙең база яҡшы, ҡаланың киләсәге бар. Ете йыл дауамында халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелә. Тәнҡитселәргә был иң нигеҙле яуап: әгәр ҡалала йәшәү насар булһа, халыҡ кимәлә кәмей. Ғөмүмән, мин тәнҡиткә тыныс ҡарайым.

▸ **Вазифағыҙ сыныҡтырҙымы?**

- Дөрөҫөрәге, һөнәрем. Төҙөүсе һөнәре абруйлы булһа ла, төҙөлөш эштәре барышында төҙөүселәргә күпме негатив яуа. Яҡын-тирәләге йорттарҙа йәшәүселәрҙән дә, ҡаланы хеҙмәтләндереүсе ойошмаларҙан да. Иҫләгеҙ әле, ҡасан ғына әле төҙөлөш бысрағы бар урамға сығып, үткеһеҙ итә ине.

▸ **Ҡаланы ошонда тыуып-үҫкән кеше күҙлегенән генә баһалап ҡарағыҙ әле...**

- Алтмышынсы, етемешенсе, һикһәненсе, туҡһанынсы, нуленсе йылдарҙы яҡшы иҫләйем... Кеше аяғы баҫҡан һәр мөйөшкә комментарий бирә алам. Кемдер: "Бына элек яҡшы ине", - ти. Элек Өфө хакимиәтенән 300 метрҙа ике ҙур сүплек туплангайны. Көньяҡ автовокзал урынында ҡала "сүплеге" еҫ тарата торғайны. Салауат Юлаев проспекты төҙөлөшө барғанда беҙ йөҙәр йыл йыйылған ҙур күләмле сүплектәрҙе сығарҙыҡ. Юҡ, минән алда эшләүселәрҙе тәнҡитләмәйем - улар тарихи шарттарҙа, шул ваҡыттағы мөмкинлектәрҙән сығып, намыҫлы, тырышып эшләне. Мин дә шулай эшләргә тырышам һәм баһаны халыҡ үҙе бирер.

▸ **Ниндәй илдәрҙең һәм халыҡтарҙың йолалары көслө тойғолар уятты? Дәүерҙәргә ҡарамайынса...**

- Тарих - минең хобби, уның менән өсөнсө синыфтан ҡыҙыҡһына башланым һәм бөгөн дә етди ҡыҙыҡһынам. Әлбиттә, заманында хәҙерге Көнбайыш мәҙәниәте нигеҙләнгән классик грек һәм рим мәҙәниәте көслө тәьҫир ҡалдырғайны. Бөйөк Төрки ҡағанаты, һуңынан Монгол империяһы һоҡландырмай ҡалманы! Бер генә хаким да Сыңғыҙхан төҙөгән хәүефһеҙ сауҙа һәм коммуникация, иң тиҙ почта системаһын төҙөй алмаған.

...Бөгөнгө халыҡтар тураһында әйткәндә, рухтары буйынса беҙгә гректар, сербтар һәм төрөктәр яҡын тип уйлайым. Һәр хәлдә, тап Грецияла, Сербияла, Төркиәлә үҙемде бик уңайлы тоям.

▸ **Ниндәй аш-һыу иң яҡшыһы?**

- Ҡатыным әҙерләгән аш-һыу, әлбиттә. Ғөмүмән, әле атап үткән илдәрҙең аш-һыуы ла оҡшай миңә.

▸ **Урындағы ризыҡтарҙан нимә яратаһығыҙ?**

- Башҡортостан Республикаһында етештерелгән аҙыҡ-түлекте. Аныҡлап әйткәндә, ҙур булмаған предприятиеларҙа етештерелгән һөт ризыҡтарын.

▸ **Аш бүлмәһе менән дуҫһығыҙмы?**

- Ҡулланыусы булараҡ ҡына. Бик күп йөрөргә тура килә һәм энергияны ла бик күп сарыф итәм...

▸ **Стенағыҙҙа торған экрандан аныҡ бер ваҡытта ҡаланың төрлө мөйөштәрендә нимә барғанын күҙәтергә мөмкин. Тегендә юл эшләйҙәр, бында ҡайындар ултырталар... Барыһы ла ус төбөндәгеләй. Урынға сығып тороуҙың да кәрәкге юҡтыр, моғайын?**

- Сығырға кәрәк. Үҙең барып, инженер ҡоролмаларын, коммуникацияларҙы үҙ күҙең менән күрмәйенсә, хәл-торош тураһында тулы күҙаллауға эйә булмаясаҡһың.

Мин һәр саҡ шулай тием: беҙҙә ике Өфө бар - ер өҫтөндәге һәм ер аҫтындағы. Ер аҫтындағыһы хаҡында бары тик белгестәр генә белә. Үҙемде ер аҫты ҡалаһын яҡшы белгән кешеләр рәтенә индерәм. Ул күпкә ҡатмарлыраҡ һәм хеҙмәтләндереү өсөн ауырыраҡ. Был эште ҡала халҡы күрмәй, әммә был бик ауыр хеҙмәт.

▸ **Һәр ҡалала ҡабатланмаған ике нәмә бар: һыу һәм икмәк, тиҙәр. Быының менән килешәһегеҙме?**

-Эйе, уларҙың тәме төрлө ерҙә төрлөсә.

▸ **Тағы ла мэрға түгел, ә аҫаба өфөлөгә был һорау: икенсе ҡаланан дуҫтарығыҙ килде, ти. Уларға күңелегеҙгә ятҡан ниндәй урындарҙы күрһәтер инегеҙ? "Родина" кинотеатры алдындағы сирендеме? Ленин урамындағы Медицина университеты ҡаршыһындағы скверҙымы? Спортсы бала сағығыҙ үткән Гастелло районынмы? Шулай итеп, һеҙ машина руле артына ултырҙығыҙ...**

- Юҡ, машинамды ҡалдырыр ҙа, ҡунаҡтар менән катерға ултырып, Өфө ярымутрауын урап, элекке Шакша кисеүенән Өфө йылғаһы буйлап Ағиҙелдәге нефть эшкәртеү заводтарына тиклем үтер инем. Әгәр шундай маршрут буйынса үтһәгеҙ, элек белмәгән Өфөнө күрәсәкһегеҙ. Һәм ҡондоҙҙарҙы, төлкөләрҙе, ҡуяндарҙы, хатта уңыш йылмайһа, ҡабандарҙы һәм мышыларҙы күрергә мөмкин. Туҡай мәсете районын, Софья аллеяһын бик яратам. Октябрь революцияһы урамы менән Цюрупа урамы киҫелешен яратам. Төрлө ерҙә йәшәргә тура килгәнлектән, күңелгә яҡын башҡа урындар ҙа бар...

▸ **Июндә "ART-UFA-2015" художество форумын асыу сағыу ваҡиға булды. Һынлы сәнғәт тураһында һүҙ йөрөткәндә, өйөгөҙгә ниндәй картина элеп ҡуйыр инегеҙ: пейзажмы, натюрмортмы, ниндәйҙер футуристик һүрәтме? Күңелегеҙгә нимә яҡын?**

- Күңелемә яҡшы һынлы сәнғәт яҡын. Мин художество мәктәбендә уҡыным, һәм үҙемдең ҡарашым, зауығым бар. Бала саҡта голланд оҫталарының ижады, Рәсәйҙең XIX быуатының һынлы сәнғәте күңелдә тәрән эҙ ҡалдырҙы. Соцреализмды ла тыныс ҡабул итәм, импрессионистарҙың тәүге тулҡынын бик яратам. Ғөмүмән, архитектурала ла, һынлы сәнғәттә лә классик мәктәпте баһалайым.

▸ **Төрлө йылдарҙа ҡала менән етәкселек итеүселәрҙең яратҡан ағастары булды: Аксаков - йүкәләрҙе, Шакиров - шыршыларҙы, Зайцев - ҡайындарҙы... Һеҙҙең шундай яратҡан ағасығыҙ бармы?**

- Ҡайынды, йүкәне, көслө, йыуан тау шыршыһын бик яратам.

▸ **Спорт һеҙгә яҡын. Көйәрмәнһегеҙме? Ниндәй командалар өсөн "ауырыйһығыҙ"?**

- Бала саҡтан ике - "Салауат Юлаев" хоккей һәм "Спартак" футбол командалары өсөн "ауырыным". Хәҙер уларға үҙебеҙҙең "Өфө" футбол командаһы ла ҡушылды.

▸ **Ҡатмарлы проблемаларҙы нисек хәл итәһегеҙ? "Кискә ҡарағанда иртә яҡшыраҡ" тигән мәҡәл менән килешәһегеҙме?**

- Эйе, был минең принцибым. Әлбиттә, ғәҙәттән тыш хәл булмаған осраҡта.

▸ **Өс йыл элек журналистар менән бер әңгәмәгеҙҙә хәл итеүҙе һуҙыу мөмкин булмаған төп мәсьәләләрҙе билдәләгәйнегеҙ. Ул "ер аҫты" ҡалаһы - ҡала коммуникациялары проблемаһы. Икенсеһе - транспорт, шулай уҡ теләгән һәр кемде торлаҡ менән тәьмин итеү мәсьәләһе. Тағы - ҡала халҡының ял итеү урындары. Бөгөн өҫтөнлөктә нисек ҡуйыр инегеҙ?**

- Моғайын да, шулай уҡ ҡалдырыр һәм ихата территорияларын төҙөкләндереү, иҫке йорттарҙан граждандарҙы күсереү һәм иҫке торлаҡ фондын ремонтлауҙы ла өҫтәр инем.

▸ **Һуңғы һорау: мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткәндә аҫаба өфөлө Ирек Ялалов мэр Ялалов менән һүҙгә килешәме?**

- Юҡ, улар икеһе лә үҙенең тыуған ҡалаһын ярата һәм уға ихлас күңелдән именлек, үҫеш теләй.

**"Вечерняя Уфа" гәзитенең баш мөхәррире Вячеслав ГОЛОВ әңгәмәләште.**

## 2. ӨСМӨЙӨШ

Әхмәттәр менән хушлашып сыҡҡас, Мансурҙың тыуған ауылына юлландыҡ. "Бала, үҫмер саҡтарым үткән ерҙәрҙе күреп ҡайтырһың", - тине ул. Беҙ барған ерҙәр ифрат матур, ә бына юлдары ташҡа үлсәйем ине. Битләүҙәре һомғол ҡарағайҙар менән ҡапланған таш ҡаяларҙы урай-урай утыҙ саҡрымдай араны сәғәттән артыҡ ваҡытта үттек.

- Әллә ҡайҙа, йәһәннәмгә китеп барғандай тояу үҙемдә, - тинем юлдашыма күҙ ташлап.

Мансур көләмһерәй биреберәк ҡуйҙы ла:

- Был юлды күп тапаным инде. Атҡа ла ултырып сыға инек, йәйәү ҙә күп йөрөлдө. Ярай, түҙ, килгәненә үкенмәҫһең, - тине.

Ул машинаһын ауылдың осонда ғына урынлашҡан зыярат янында туҡтатты.

- Атай менән әсәй янына һуғылмай китеү яҙыҡ булыр. Рухтарына бағышлап, доғалар ҙа уҡып китербеҙ, - тип Мансур мине зыяратҡа алып инеп китте.

Атаһы менән әсәһенең ҡәбере йәнәшә генә ине. Икеһе лә тимер рәшәткәләр менән уратылып, мәрмәр таштар ҡуйылған. Соҡоп, исем-шәрифтәре яҙылған, әммә мәрхүмдәрҙең фотолары юҡ ине.

- Мосолмандарға ярамай, тигәс, ҡәбер таштарына һүрәттәрен ҡуйҙыртманым, - тине Мансур ҡулы менән рәшәткәләргә ҡарҙы һыпырып төшөргәләп.

Доға уҡып алғас, юлдашым мине зыяраттың арғы башына алып китте һәм беҙ бер рәшәткә эсендә урынлашҡан өс ҡәбер янына етеп туҡтаныҡ. Уларға ҡара мәрмәрҙән зауыҡ менән биҙәлгән таштар ҡуйылғайны, ундайҙарҙы ҡала зыяраттарында атаҡлы кешеләрҙең ҡәберҙәрендә генә осратырға була ине. Түбәнлектә ятҡан ауылдың зыяратында ошондай ҡара мәрмәрле ҡәберҙәр күреү бер аҙ аптырашта ҡалдырҙы.

- Кемдәр һуң былар? - тип һорай һалдым.

- Кемдәр, тип ни - ошо ауыл кешеләре. Быныһы - Ғәйзулла бабайҙыҡы, быныһы - Сәғизулла бабайҙыҡы, урталарында - Хәлиҙә инәй ҡәбере. Улдары эшләтеп алып ҡайтып ҡуйҙырҙы, - тип Мансур республикала билдәле генә кешенең исемен атаны.

- Улар тураһында Ғәффә апайым яҡшы белә, унан һөйләтербеҙ, - тине ул зыяраттан сығырға юлланғас.

Ғәффә апай беҙҙе ҡапҡа төбөнә үк сығып ҡаршы алды.

- Бына, алып кил дә, алып кил, тигәс, килтереп еткерҙем Мөҙәрис ағайҙы, - тине Мансур күрешкән арала.

Уның һүҙҙәрен ишеткәс, апай тартына биреберәк ҡалғандай булды.

- Улай уҡ тимәнемсе. Яҙғандарын яратып уҡыйым, ишеткән-күргән ғибрәтле хәлдәрҙе һөйләп яҙҙырһам, ҡайһылай шәп булыр ине, тинем. Әйҙәгеҙ, ашым да бешкән, сәйем дә ҡайнаған, - тип, ул беҙҙе өйгә алып инеп китте.

Беҙ тамаҡтарыбыҙҙы туйҙырып, диванға ҡунаҡлағас, Мансур:

- Ҡәберҙәрен күрһәттем, Ғәйзулла бабайҙар хаҡында һөйләп әле ағайға, - тине апаһына.



# ЯҘМЫШТАР

**Мөҙәрис БАГАЕВ**

- Әй, бигерәк ҡыҙыҡ булды инде уларҙың тормошо. Ҡыҙыҡмы, ҡыҙғанысмы шунда, - тип башланы Ғәффә апай һүҙен һәм түбәндәгеләрҙе һөйләп алып китте. - Үҙем ул саҡтарҙы күреп-белмәгәс, әсәйемдән ишеткәндәрҙе һөйләйем әле башта.

... Ғәйзулла менән Сәғизулла күршеләр генә тыуып-үҫеп, бәләкәйҙән бер-береһе менән бик дуҫ булалар. Егет ҡорона ингәс тә гел бергә йөрөйҙәр. Халыҡ Ишәй менән Ҡушай тип тә йөрөтә үҙҙәрен. Был ике дуҫ бер үк ҡыҙға ғашиҡ була хатта. Ауылда ғына түгел, тирә-яҡта иң һылыу ҡыҙ булған Хәлиҙәгә ғашиҡ була улар. Кеше аптыратып клубтан да ҡыҙҙы икәүләшеп оҙатып ҡуялар. Бер уйлаһаң, үҙ-ара дошманға әйләнергә тейештәр ҙә бит, ләкин былар бер ни булмағандай дуҫлашып йөрөй бирә. Хәлиҙә иҫ киткес сибәр була, тинем бит әле. Ул ҡартайғансы кеше һоҡландырып йәшәне. Ҡыҙ сағында уға күрше ауыл егеттәре лә ғашиҡ була. Береһе хатта урлап та алып китә. Ғәйзулла менән Сәғизулла арттарынан ҡыуып етеп, һалдырып ала ҡыҙҙы.

Ике дуҫ араһынан Ғәйзулланы оҡшатып, шуны һайлай Хәлиҙә. Туй үткәреп, бер ай самаһы ғына бергә йәшәп ҡала улар. Һуғыш сығып, Ғәйзулла менән Сәғизулла бер үк көндә фронтҡа китеп тә бара. Хәлиҙә ауырға ҡалып өлгөргән була һәм бер малай таба. Әсә бәхетен күреп, ҡыуанып ҡына йөрөгәнендә Ғәйзулланың ҡара ҡағыҙы килә. Шул ҡәҙәре үрһәләнеп, иренең үлемен бик ауыр кисерҙе, тигәйне әсәйем. Күрәһең, ныҡ яратҡан булғандыр инде, бахырҡай.

Ә бына Сәғизулла бер ниндәй йәрәхәт-фәлән алмай һуғыштан иҫән-һау йөрөп ҡайта. "Киткәндә атайым мулланан бетеү яҙҙырып алып, шуны муйыныма тағып ебәргәйне, шул һаҡланы мине", - тип һәр саҡ һөйләр булған ул. Әҙмәүерҙәй ир-егет ни - ҡайтыу менән ҡабат леспромхозға эшкә сыға, өй мәшәҡәттәренә лә башҡөллә сума. Ғәйзулланыҡыларға ныҡ ярҙамлаша, әммә үҙ ғаиләһен булдырыу хаҡында уйлап та ҡарамай. Ул саҡта ни, ауыл тулы яңғыҙ ҡатын-ҡыҙ - теләгәнен һайлап ал. Әммә Сәғизулла берәүгә лә күҙ һалмай, бары ике өй араһында ҡайнауын белә. Шул Хәлиҙәгә ғашиҡ булып, уны яратып, шунан айный алмай тик йөрөгәндер инде. Ауыл халҡы, оҙаҡҡа бармай өйләнешеп ҡуйырҙар, тип көтә быларҙы. Ләкин йылдар үтә, тик был икәү һаман яңғыҙ йәшәй бирә. Яҡын дуҫының ҡатыны булғанға, Сәғизулла тәҡдим яһарға ҡыймағанмы, әллә Хәлиҙә ризалыҡ бирмәгәнме. "Ғәйзулланың үлгәненә ышанмайым. Көтәм әле, ҡайта ул", - тип тә әйткән икән, тигәйне әсәйем. Сабырлыҡтары бөткәнмелер, биш йыл үткәс кенә никах уҡыта былар.

Хәлиҙә бер-бер артлы ике ҡыҙ таба. Әсәләренә оҡшап, икеһе лә шул тиклем матурҙар ине. Минән аҙыраҡ кесерәк инеләр, бер ваҡыттараҡ үҫтек улар менән. Ул ҡыҙҙар үҙҙәре кеүек аҫыл егеттәргә кейәүгә сығып, күптән инде Өфөлә йәшәй. Йәйен генә күмәкләшеп ҡайтып киттеләр.

Ғәффә апай һуңғы һүҙҙәрен әйтте лә стеналағы көкүкле сәғәткә ҡарап алды һәм:

- Ейәнем менән килен дә ҡайтып етергә тейеш. Ҡана, мин самауырымды яңырта һалайым, бергәләшеп сәй эсербеҙ, - тип урынынан торҙо.

Беҙ ҙә саф һауа һулап инәйек, тип урамға сыҡтыҡ. Ул да булмай, ҡапҡанан егеүле ат килеп керҙе.

- Ҡунаҡтар бар икән дә. Һаумыһығыҙ, - тип сананан төшә һалып, мыҡты ғына кәүҙәле ир-егет беҙҙең менән килеп күреште. Йәнәшәһендә ултырып килгән ҡатыны ла янбыҙға килеп, күрешергә ҡулын һуҙҙы.

- Нисек, Сабир ҡусты, аттарың именме? - тип һорай һалды Мансур егеттән.

- Аллаға шөкөр, имен әлегә. Бына килененә бер биҙрәгә яҡын һөт тә һауып алды, - тине Сабир ҙур ғына бидонға күрһәтеп.

- Ҡымыҙ эсәбеҙ икән, улайһа, - Мансурҙың был һүҙҙәренә ҡустыһы:

- Эсәбеҙ. Өйҙә әҙерҙе лә бар ине. Өләсәйем һыйламанымы ни? Онотҡандыр, күрәһең, - тип әйтә һалды ла өҫтәп ҡуйҙы. - Сәй эсеп сыҡҡас, мунса яғып ебәрермен. Сабына-сабына шунда эсерһегеҙ ҡымыҙҙы.

Беҙ өйгә инеп, күмәкләшеп тағы табынға ултырҙыҡ. Апайҙың хәбәрен тиҙерәк тыңлап бөткөм килә ине. Өҫтәл артынан тороу менән Ғәффә апайҙан:

- Шунан, артабан нисек булды? - тип һорай һалдым.

- Артабанғыһын ишетеп түгел, үҙем күреп беләм, - тип башланы һүҙен хужабикә. - Хәлиҙә менән Сәғизулла өйләнешкәндән һуң алты йыл үткәс, бар әҙәмде аптыратып, Ғәйзулла бабай ҡайтып инде. Мин бабай тип әйтһәм дә, ул саҡта ҡарт түгел ине әле ул, ҡырҡ йәше саҡ тулған булғандыр. Әммә ҡайтып ингәндә бөршәйеп бөткән, сибек кенә кәүҙәле ҡарт һымаҡ ине. Әсәһе, Мәғзүнә инәй, улын көтөп ала алмай, бер йыл элек кенә үлеп ҡуйғайны. Бер кемһеҙ, буш торып ҡалған йортҡа ҡайтып инде Ғәйзулла бабай.

Мин бала булғас, ул саҡта аңғарып етмәгәнмендер. Әсәйем әйтә: "Эй көтәбеҙ ни булырын, Хәлиҙә Сәғизулла менән йәшәп ҡалырмы, әллә кире Ғәйзуллаға ҡайтырмы икән, тип". Улар өсөн ҡыҙыҡ булмаһа ла, кешегә ҡыҙыҡтыр инде. Хәлиҙә ҡайтмаған, әммә: "Ҡайтып инерен күңелем һиҙә ине бит, ниңә тағы бер аҙ сабыр итмәнем икән", - тип ныҡ өҙгөләнгән, ти. Ә бына Ғәйзулланың улы Зәйнулла атаһын бер ҙә үҙһенмәгән, әйтеп ҡараһалар ҙа, бар тип тә белмәгән. Ул ваҡытта ун биш йәшен тултырған, инде аң кергән егет булған бит инде. Сәғизуллаға эҫенеп, шуны атаһы кеүек күреп йөрөгән.

Ғәйзулла бабай - электән йомоҡ кеше, ҡайҙа булғанын, ни эшләп йөрөгәнен бер ҙә әйтеп бармаған. Кеше генә, ҡайҙандыр ишетеп, әсирлектә булған икән, тип һөйләп алды. Беҙҙең атай ҙа фронтовик бит, һуғыштың башынан аҙағына тиклем йөрөп ҡайтҡан кеше. Бер саҡ ҡыҙмаса булып ҡайтып инде лә, әсәйгә: "Ғәйзулланың тел асҡысын таптым бит әй. Бер ҡырлы стаканды төп күтәрә бәрҙерткәйнем, илай-илай бушанды үткәндәрҙе һөйләне лә бирҙе", - тине һәм унан ишеткәндәрен беҙгә лә еткерҙе.

Ғәйзулла бабай һуғышта разведкала йөрөгән икән. Бер саҡ, дошмандар яғынан сығып килгәндә, минаға юлығалар. Уныһы шартлап, бер-икеһен теткеләп ырғыта. Ғәйзуллаға ла эләгеп, ул да һушын юғалтып, ергә тәгәрәй. Иптәштәре уны ла үлгән икән тип, шунда ҡалдырып китә. Арттарынан ҡыуып килгән фашистар тере икәнен һиҙеп, Ғәйзулланы әсирлеккә ала. Аҙаҡ Германияға алып китеп, бер лагерға илтеп тығалар. Атайым исемен дә әйтеп һөйләгәйне, онотҡанмын инде бына.

Ғәффә апай концлагерҙың исемен иҫкә төшөрөргә теләгәндәй, һүҙенән туҡтап ҡалды.

- Дахауҙа була ул, - тип Мансур апаһына ярҙамға килде.

- Эйе, Дахау, тине шул, - апай иҫләй алғанына ҡыуанғандай, йәнләнә биреп ҡуйҙы ла, хәбәрен артабан һөйләп алып китте. - Әсирҙе башҡалар менән бергә тәүҙә ниндәйҙер заводҡа йөрөтөп эшләтәләр, артабан бер немес алпауытына ҡоллоҡҡа тапшыралар. Һуғыш аҙағына тиклем шул алпауытҡа бил бөгә, бахыр. Беҙекеләр барып ҡотҡара үҙен. Әммә күрәһеләре алда була әле уның. Үҙең теләп плен төшкәнһең, тип, Ғәйзулла бабайҙы судҡа баҫтырып, ун йылға Себергә ебәрәләр. Шунда ун йыл буйы урман ҡырҡа ул. "Беҙҙекеләр неместәрҙән дә яманыраҡ ҡыланды. Ана үләм, бына үләм, тип, көн дә үлем көттөк. Тере ҡалыуға ышаныс булмағас, юҡҡа өмөтләндермәйем, тип, ауылға хәбәр-фәлән дә ебәрмәнем", - тигән Ғәйзулла бабай.

Ауылға ҡайтҡас, күҙенә нур инеп, тәненә ит ҡунып, теремекләнеп китте ул. Төҫкә лә йәшәреп киткәндәй күренде. Тыуған яҡ тыуған яҡ инде ул - һауаһына тиклем дауа. Аҙыраҡ йән кергәс, ул да леспромхозда эшләй башланы. Байтаҡ ғүмер уҙһа ла, яңынан ҡатын алырға уйламаны ла. Алам тиһә, ауылда яңғыҙ бисә-сәсә байтаҡ ине инде - бер яңғыҙы йәшәй бирҙе шунда. Хәлиҙә кереп, кейем-фәләнен йыуып, өйөн йыйыштырғылап йөрөгән йөрөүен. Бер ни булмағандай аралашып йәшәгәндәрен үҙем дә күреп беләм.

Шулай ун йылдан артыҡ йәшәнеләр шикелле. Бер көн ауылда Сәғизулланы ағас баҫып үлтергән икән, тигән хәбәр таралды. Дөрөҫ булып сыҡты - ҡырҡҡан ағасы кире яҡҡа ауып китеп, өҫтөнә ҡолаған да ҡуйған. Бына бит, һуғыш тиклем һуғыштан тере ҡайтып, бында юҡтан ғына үлеп ят инде. "Ул көндө бетеүен тағырға онотоп киткән, ни мин, күрмәй ҡалғанмын", - тип илаған икән ҡатыны.

Ирен күмер-күммәҫ үк кеше: "Хәлиҙә кире Ғәйзуллаһына ҡайтырмы икән?" - тигән хәбәр йөрөтә башланы. Әҙәм балаһы ҡыҙыҡ ҡына бит ул - берәүҙә бер ҡайғы, икенселәрҙә - икенсе ҡайғы. Шулай ҙа халыҡтың көткәне раҫ килде: Хәлиҙәһе Ғәйзуллаһына ысынлап та кире ҡайтты. Ул саҡ Зәйнуллалары уҡып сығып, Өфөлә арыу ғына эшкә урынлашып, шунда төпләнгәйне. Сәғизулланан тыуған ҡыҙҙар менән дүртәүләшеп йәшәнеләр Ғәйзулла бабайҙың өйөндә. Әлфирә менән Әлмирә Өфөгә киткәс, икәү генә ҡалып, ҡартайғансы ғүмер кисерҙеләр шунда. Ер ҡуйынына ла бер-бер артлы ғына инеп яттылар. Ғәйзулла, Сәғизулла бабайҙар, Хәлиҙә инәй бер-береһенә ныҡлы тоташҡан өсмөйөш һымаҡ булдылар инде.

- Мөхәббәт өсмөйөшө, тип әйт, - тине шунда Мансур апаһының һүҙен бүлдереп.

- Нимәнеке булһа ла, өсмөйөшкә оҡшап торҙолар инде, - тип һүҙен тамамланы Ғәффә апай.

- Сит илдең юҡ-бар мелодрамалары тип, телевизорҙан күҙҙе алмайбыҙ. Бына ҡайҙа ул ысын мелодрама, шулаймы, ағай? - тине шунда Мансур миңә күҙҙәрен төбәп.

- Дөрөҫ әйтәһең, ҡустым, - тип, уның әйткәнен хуплап ҡуйҙым...

**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

✓ *"Юғалған мәҡәлдәр" уйынында мәҡәл ике өлөшкә бүлеп, бәләкәй карточкаларға яҙыла, тәүге өлөшө ҙур хәреф менән яҙыла, ул икенсе яртыһын табырға тейеш. Бер-береһен табыусыларҙың тиҙлегенә ҡарап, мәрәйҙәр һаны билдәләнә.*



*АФАРИН!*

# МӘКТӘПТӘР ГЕНӘ ТҮГЕЛ,

## "Йәйләү" программаһы ла илһөйәрлек тәрбиәләй балаларҙа

**Мин быйыл йәмғеһе дүртенсе тапҡыр "Йәйләү" программаһы буйынса эшләгән лагерҙа тәрбиәсе булып эшләнем. Тик быйылғыһы, Әбйәлил районының "Ирәндек" ял үҙәге базаһында булдырылғаны, "Арғымаҡ" тип аталды.**

Дөрөҫөн әйткәндә, бер аҙ хәүеф менән килгәйнем бында. Сөнки Мәғариф министрлығы ҡарамағындағы "Йәйләү" сменаһында бөтөн республиканан һайлап алынған, һәләтле балалар ял итә, ә "Арғымаҡ" фәҡәт үҙҙәре теләп килеүселәрҙе туплағайны. Улар менән "Йәйләү" программаһын үтәп булырмы икән? Программа бик ҡатмарлы бит. "Йәйләү" программаһы менән эшләгән лагерҙарҙа һәр сәғәт, һәр минут бала күңелен сафландырһын, халҡы ижадына, телгә, моңға, тарихҡа, киләсәкке яҙмышыбыҙға ҡарата битарафлыҡтан арындырһын. Бөтөн саралар ҙа ошо маҡсаттан сығып ойошторолһон!" - ти программаның авторы Мәрйәм апай Бураҡаева. Был бурысты атҡара алырбыҙмы? Ләкин хәүефләнеүем тәүге көндә үк юҡҡа сыҡты. Балалар тиҙ арала бер йоҙроҡтай тупланды, һәр әйткән һүҙҙе һыуға сарсаған кешеләй йотоп торҙо, ырыу атрибуттарын, ырыуҙың "Арғымаҡ" ял итеү сменаһының гимны итеп алынған "Башҡортостан" (Дамир Әҙелбаев һүҙҙәре һәм көйө) йырын, бейеү хәрәкәттәрен тиҙ арала үҙләштереп тә алды. "Мәскәү ҡалаһынан килгән башҡорт балалары туған мөхиткә ҡалай һыуһаған, бөтөн яңылыҡҡа, мәғлүмәткә иғтибарлылар бит әле", тип уйлап та өлгөрмәнем, Башҡортостан райондары мәктәптәренән килгәндәрҙең дә шундай уҡ хәлдә булыуын, байтаҡтарының туған телдә һөйләшмәй икәнен күреп көйөндөм. Артабан һөйөнөстәр китте: бар балалар тырышып-тырмашып туған телен, башҡорт йырҙарын, йолаларын өйрәнде, башҡорт мөхитенә ныҡлап ылыҡты ла китте.

Алғараҡ китеп булһа ла бер ваҡиға тураһында яҙайым әле. "Йәйләү" программаһы авторы Мәрйәм Бураҡаева: "Бала йырсы йәки бейеүсе булып китһен өсөн генә түгел, ә һәләте, илһамы уянһын, дәрте ташып торһон, сәләмәтлеге нығынһын өсөн кәрәк ул йыр һәм бейеү. Тәбиғәт быҙдай ҡиммәттәрҙе юҡҡа ғына бар итмәгән. Күңелдәрҙе берләштереүсе, дуҫлыҡ, татыулыҡ тәрбиәләүсе алмаштырғыһыҙ шарт ул йыр һәм бейеүҙәребеҙ", - тигәйне. Ошо фекерҙе раҫлаусы бер ваҡиға. Билдәле булыуынса, лагерҙа ял итеүселәр башҡорттоң ете ырыуына бүленгән. Мин тамъян ырыуы тәрбиәсеһе булдым. Ырыу егеттәре (малайҙар тип әйтке килмәй) байтаҡ йырҙар өйрәнде. Хушлашыу мәле иң моңһоу, күҙҙәргә йәш ала торған бер ваҡыт бит инде ул. Ҡапҡа төбөндә балалар илаша, ҡосаҡлаша, әле яңы ғына бер-береһен бар тип тә белмәгән балалар бер туғандай булды ла ҡуйҙылар. Мин ҡайтыусы балаларҙы оҙатҡас, бүлмәмә юл алдым. Йыр тауышы ишетелгәнгә артыма боролоп ҡараһам, тамъян ырыуынан дүрт егет ҡулға-ҡул тотошҡандар ҙа, "Ай-һай, гөлкәйем..." тип ҡысҡырып йырлап киләләр, күҙҙәрендә йәш тә мөлдөрәп ҡала. Араларында бынан өс аҙна элек ошо йыр барлығын да, туған телдә йырлау мөмкинлеген дә белмәгән егет тә бар. "Эй, атай-әсәйҙәр! Балаларығыҙҙы туған мөхиттән айырып, ни тиклем хилафлыҡ эшләйһегеҙ. Күңелдәренә туған тел, туған мөхит, туған моң тигән төшөнсәләрҙе бикләп ҡуйып, балаларығыҙҙы ярым кешегә әйләндерәһегеҙ бит. Ә үҙ мөхитендә үҙ асылына ҡайтҡан балалар ҡалай күркәм!" - тип ҡысҡырғы килде хатта.

Беҙҙең саралар тураһында бер нисә һүҙ. "Арғымаҡ"та тәүге көндән үк ҡайҙа мөмкин, шул урынға матур итеп биҙәп башҡорт халыҡ мәҡәлдәре яҙып элдек. Балаларға шул мәҡәлдәрҙе күңелгә, хәтергә һеңдерә йөрөргә, шулай итеп "Юғалған мәҡәлдәр" көнөнә әҙерләнергә ҡуштыҡ. Әйткәндәй, ял үҙәгендә бөтөн саралар һәм конкурстар, бәйгеләр ҙә мәрәйҙәр менән баһалана. Ниндәй сарала ҡатнашһаң да, һиңә бер мәрәй яҙыла. Артабан баланың оҫталығына, әүҙемлегенә ҡарап, мәрәйҙәр өҫтәлә бара. "Юғалған мәҡәлдәр" сараһына ла бик тырышып әҙерләнде балалар, береһенән-береһе уҙҙырып, мәҡәлдәрҙе ятланы, уларҙың мәғәнәһе менән ҡыҙыҡһынды, бәхәстәр ҡорҙо. "Юғалған мәҡәлдәр" уйынында мәҡәл ике өлөшкә бүлеп, бәләкәй карточкаларға яҙыла, тәүге өлөшө ҙур хәреф менән яҙыла, ул икенсе яртыһын табырға тейеш. Бер-береһен табыусыларҙың тиҙлегенә ҡарап, мәрәйҙәр һаны билдәләнә. Бер ҡараһаң, ябай ғына сара кеүек. Ә бала бит мәҡәлде ятлай, һүҙ байлығын, телмәрен байыта, халыҡтың күҙәтеүсәнлегенә, тапҡыр сағыштырыуына иғтибар итә.

"Алпамыша" ярыштары ҡалай күңелле үтә! Уҡ атышын киноларҙа ғына күргән балалар ярышта теләп ҡатнаша. "Әтәстәр алышы", "Табан терәшеп торғоҙошоу", "Ат сабышы" (тал сыбыҡҡа атланып), ҡалаҡҡа йомортҡа һалып йүгереү һәм башҡа уйындар "Алпамыша" исеме менән бәйле булғас, балаларға Алпамыша тураһында ла мәғлүмәт бирелә. Быларҙан тыш, исемле приздарға әллә күпме ярыштар ойошторола. Һәр береһе хаҡында мәғлүмәт бирелә.

Ә төрлө шәхестәр, сәнғәт оҫталары менән осрашыуҙар иһә мәңге хәтерҙә ҡалырлыҡ ваҡиғаға әйләнә бала тормошонда. Мәҫәлән, "Арғымаҡ" этнотөркөмө менән осрашыу сәғәттәргә һуҙылды. Сәсәниә Гөлнур Мәмлиева менән Асия Ғәйнуллинаның боронғо эпостарҙы уҡыу оҫталығы һабаҡтары ла балаларҙа ҙур ҡыҙыҡһыныу уятты. Әлбиттә, сәсәниәләр менән осрашыу, уларҙың һабаҡтары балаларҙы ялыҡтырмаҫмы икән, тигән шикләнеү булғайны башта. Хатта әҙәп өсөн генә тып-тын ҡалып тыңлайҙарҙыр, тип тә уйлап ҡуйғайным. Бер саҡ ҡыҙҙарҙың үҙ бүлмәләренә йыйылып, тап Асия апай Ғәйнуллина һымаҡ һамаҡлап ултырыуҙарын ишетеп, аптырап киттем. Ихласлыҡ, халыҡсанлыҡ һәм оҫталыҡ балаларҙы ҡалай йәлеп итә!

Мәрйәм Бураҡаеваның әйтеүе буйынса, быйыл ун һигеҙенсе йыл инде өйҙәш булып эшләй был "Йәйләү" программаһы буйынса ойошторолған, барлыҡ тәрбиә эштәре башҡорт телендә алып барылған берҙән-бер лагерь. Шунлыҡтан, йыл һайын беҙҙе һыйындырған лагерь талаптарына яраҡлашырға, ҡулайлашырға тура килә. Программала ҡаралғандың яртыһы үтәлмәй ҙә ҡала, әлбиттә. Быйыл программаны Әбйәлил районының "Ирәндек" лагеры ҡабул итте. Лагерь етәкселәренә, унда эшләгән коллективҡа рәхмәтебеҙ сикһеҙ, улар беҙҙе аңланы, рухташ, фекерҙәш булдылар. Улар үҙҙәре лә рухи яҡтан байыуҙары, фекер тәрәнлеге алыуҙары хаҡында ҡыуанып һөйләне. "Арғымаҡ" лагеры директоры Рәйсә Күзбәкованың ихласлығы шулай уҡ барыбыҙҙы ла һоҡландырҙы.

**Әйткәндәй, 2013 йылда Күмертау ҡалаһы эргәһендәге лагерҙа ошо программа нигеҙендә эшләгән "Йәйләү"гә БР мәғариф министры урынбаҫары Венера Вәлиева килгәйне һәм программаның һәр районда эшләргә тейешлеген һыҙыҡ өҫтөнә алып, уның авторына министр Әлфис Ғаязов исеменән Рәхмәт хаты тапшырғайны. Мәғариф етәкселәренең фекере үҙгәрмәһә, ысынлап та, киләсәктә "Йәйләү" программаһы буйынса эшләгән айырым лагерь булдырылыр, ул балаларыбыҙҙы илһөйәр, телһөйәр итеп тәрбиәләүгә ҙур өлөш индерер, тигән өмөт бар.**

**Зүлиә ХӨСӘЙЕНОВА.**








✓ *Һеҙҙеке һаналһалар ҙа, һеҙ уларға хужа түгел. Һеҙ уларға тик һөйөү генә бүләк итә алаһығыҙ. Һеҙҙең уларға оҡшарға тырышыуығыҙ ихтимал, ләкин балаларығыҙ үҙегеҙгә оҡшаһын тип тырышмағыҙ.*



ИНТЕРНЕТТАН



# ҺУҢЛАП ЙӨРӨЙҺӨҢМӨ?

■ Ҡыҙғанысҡа күрә, барыбыҙ ҙа сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуыбыҙ менән маҡтана алмайбыҙ. Шулай ҙа аҙнаның биш көнө дауамында көнөнә бер тапҡыр ғына булһа ла йәшелсә ашайһығыҙ икән, һеҙ үҙегеҙ менән ғорурлана алаһығыҙ. Был осраҡта организм шлактарҙан таҙара, тип белдерә Көньяҡ Корея ғалимдары. Сеулдағы Милли университетта үткәрелгән тикшеренеү һөҙөмтәһе күрһәтеүенсә, биш көнлөк йәшелсә диетаһынан һуң организмда зарарлы химик матдәләр күләме түбәнәйә. Йәшелсә ашау ярҙамында фталат һәм антибиотик матдәләрҙең күләмен дә түбәнәйтергә мөмкин.

■ Гел һуңлап йөрөүсе кешеләр була, әммә улар быны юрамал эшләмәй. Һуңлау ғәҙәте - бары тик холоҡтоң бер һыҙаты һәм быны төҙәтеү ныҡ ауыр, ти белгестәр. Әммә үҙ алдына төрлө маҡсаттар ҡуйып йәшәүселәр һуңлау ғәҙәтенә эйә түгел икән. Бер генә маҡсатты эҙәрлекләүселәр бер ҡасан да тиерлек һуңламай, тик бер юлы бер нисә эш эшләүселәр гел генә ваҡытына килмәүҙәре лә ихтимал. Яй, ҡабаланмай ғына йәшәүселәр шулай уҡ йыш һуңлай. Йәш атаәсәләр, үҙенең вазифаһы менән риза булмаусылар ҙа һуңлаусан була, ти ғалимдар.

■ Ҡытайҙа ҡыҙыҡлы тикшеренеү үткәргәндәр. Унда 120 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Уларҙы тәҙрәһе булмаған бүлмәгә бикләгәндәр. Һынау мәлендә тәүҙә бүлмәнең утын һүндергәндәр, аҙаҡтан яндырғандар. Шулай уҡ уларға ҡурҡыныс һүрәттәр күрһәткәндәр һәм төрлө тауыштар тыңлатҡандар. Гүзәл заттарҙың ҡайһы осраҡта нығыраҡ ҡурҡыуын пульс йышлығы һәм тир бүленеү менән билдәләгәндәр. Асыҡланыуынса, ҡатын-ҡыҙҙар төндә бүлмәлә хатта ут янып торғанда ла нығыраҡ ҡурҡа икән. Төндө кеше хәүефле мәл тип ҡабул итә һәм шуға ла һиҙгерлек һәм реакция көсәйә.

■ Һуңғы ун йыл эсендә үткәрелгән тиҫтәләрсә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, майһыҙ диеталар сәләмәтлек өсөн зыян ғына килтерә. Бөгөн түбән калориялы аҙыҡ-түлек ҡулланыу модаға инеп китте һәм ул иң сәләмәт туҡланыу өлгөһө итеп ҡабул ителә. Бындай продукттар етештереүселәр вәғәҙәләүенсә, май күләме түбән булған аҙыҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренән, яман шеш һәм диабеттан һаҡлай. Әммә был аҙыҡ төрҙәре составындағы тоҙ, трансжир, зарарлы углеводтар берәүгә лә файҙа килтергәне юҡ әле. Сәләмәтлек өсөн майҙың күләменә ҡарағанда, уның сифаты күпкә мөһимерәк. Мәҫәлән, түбән калориялы икмәктә май күләме аҙ, тик аҡ он һәм шәкәр күп, шуға ла майһыҙ, әммә эшкәртелгән углеводтарҙан торған диета ауырлыҡтың артыуына, йөрәк сирҙәренә, 2-се типтағы диабетҡа килтерә.

■ Көслө стресс кисергәндән һуң, кеше шунда уҡ ятып йоҡлаһа, ул уны еңелерәк кисерәсәк. АҠШ-ның Массачусетс университетында үткәрелгән тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, бындай ваҡытта иң яҡшы һәм тәьҫирле дарыу булып йоҡо тора. Әгәр ҙә кеше юлда берәй хәл-ваҡиғаның шаһиты булған йәки үҙе аварияға эләккән икән, йоҡлап алғандан һуң уның эмоциональ торошо күпкә яҡшырасаҡ.

■ Америка ғалимдары тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, балыҡ һәм диңгеҙ ризыҡтары яратыусылар башҡа кешеләр менән сағыштырғанда, 2,2 йылға оҙағыраҡ йәшәй. 16 йыл буйына алып барылған тикшеренеүҙәрҙә 65 йәште үткән 2600 кеше ҡатнаша, табиптар уларҙың йөрәк тамырҙарын даими тикшереп тора һәм омега-3 майлы кислотаһы кимәле юғары булған кешеләр оҙағыраҡ йәшәүен асыҡлаған. Омега-3 майлы кислотаһы майлы балыҡта, диңгеҙ аҙыҡтарында күп һәм йөрәк-ҡан тамырҙары өсөн файҙалы. Балыҡ ашарға яратыусылар араһында йөрәк өйәнәгенән үлеүселәр һаны 35 процентҡа түбәнерәк. Бының өсөн аҙнаһына ике тапҡыр ғына балыҡ ризығы ашау ҙа етә.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

# ҠАТЫ ИКӘН ЙЫЛАН ҠАРҒЫШТАРЫ



Шул уҡ ауылда йәнә бер тарих һөйләнеләр. Уның авторы ла уҡытыусы.

- Мөғлифә инәйем бик оҫта баҡсасы була торғайны. Ниндәй генә йәшелсә, емеш-еләк үҫтермәне ул. Ҡыштан өйө үҫентеләр менән тулыр ине. Орлоҡто почта аша яҙҙырып алып сәсте. Уға аҡсаһын йәлләмәне. Еләктәре генә лә әллә нисә төрлө була торғайны.

Бер мәлде йәй көнө иртәнсәк һыйыр һауырға сығып барғанында аласыҡ менән утынлыҡ араһында ятҡан йыланды күреп ҡала һәм ҡурҡышынан ҡысҡырып ебәрә. "Ана, йылан ята, үлтерегеҙ", тип бабайына әйткәс, апам үлтертмәҫкә ныҡыша. Инәйем улын уятып, теге йыланды үлтертә. Ул йыландың шау-шыуға сыҙап, көтөп ятыуын әйт әле һин уның.

Шул йәйҙә уларҙың гөрләп торған донъяһы тотошлайы менән янып, көлгә ҡалды. Эшләнеп ятҡан яңы йорттары ла - барыһы ла янды. Ҡышына инәй ауырып, аяҡтан йығылды. Мандый алмай, үлеп тә китте.

...Бер уйлаһаң, бәндә маңлайына яҙылғанын күрә, тәҡдирҙән ҡасып булмай, тиҙәр. Тик йәнә йыландың килеп ҡыҫылыуы шомландыра...

Быныһы беҙҙең көндәрҙә булған хәл. Миҙхәт бабай ат тотоп, умарта ҡарап, мал-тыуар, ҡош-ҡорт тәрбиәләп, бына тигән итеп йәшәп ята ине. Тәүге әбейе үлгәс, икенсегә өйләнде.

Бер ваҡыт йәйгеһен ишек алдындағы бәләкәй өйҙә йәшәгән килене аласыҡта йылан күреп ҡала һәм уны күрше егеттән үлтертә. Был хәлгә бер йыл да тулмай ҡалды - Миҙхәт бабай ҡапыл ғына ауырып, үлеп китте. Ә шаулап торған донъя буш тороп ҡалды. Улы өйөн дә һатып ебәргәс, ауыл уртаһындағы нигеҙ бөтөнләй ҡороно.

Килдеғол ауылында йәшәгән Сөррә инәй ҙә йыландарға бәйле бихисап тарихтар һөйләй торғайны. Ваҡытында иждиһад итеп яҙып алып ҡалынмаған шул. Хәҙер инәйҙең баҡыйлыҡҡа күсеүенә лә байтаҡ дәүер булып китте. Улы Салауат ағай Исҡужин хәтерендә ҡалғандарын бәйән итте.

- Әсәйемдең атаһы Мөжәһетдин булған. Ә уның атаһы - Биксәнтәй. Шул Биксәнтәй олатайҙың донъяһының ҡото йыландан булған. Нигеҙендәге йыландарға өйрәнеп бөткәндәр, тегеләрҙең дә зыяны теймәгән. Кәртәһендә лә, өйөндә лә булған, ти. Малдары ла өркмәгән. Хатта һыйырҙарҙың мөгөҙөнә, ҡойороғона уралып торған, һырттарында ятҡандар, тип һөйләр ине әсәйем. Ә олатайҙың һыйыр малы ла, йылҡыһы ла бик күп булған. Етеш, хәлле йәшәгән.

Тәүге әбейе үлеп киткәс, олатай икенсе әбей алған. Ул оләсәй нигеҙ ҡото булған йыландарҙан уттан ҡурҡҡан һымаҡ ҡурҡҡан. Бер мәлде был ситеген кейһә, эсендә йылан ятҡан булған. Шул ерҙә тегенең йөрәге ярылып үлгән. Олатай ҡабат-ҡабат әбей һоратып ҡараһа ла, йыландарынан ҡурҡып, ҡатын-ҡыҙҙар риза булмаған. Ахыры, Биксәнтәй олатай көслө муллалар саҡырып, нигеҙендәге йыландарҙы ҡыуҙырған. Нигеҙҙән йыландар шул тиклем күп сыҡҡан. Баштарын сәкәйтеп, һыҙғырышып, ыҫылдап күскәндәр Һаҡмар буйына. Улар күсенгән юлға дүрт йылһыҙ үлән үҫмәгән, ти.

Ә олатайҙың донъяһының ошонан һуң ҡото китеп, байлығы ҡороған. Төптө юҡтан малдары ҡырылып бөтөп, көнө бер йолҡош бейәгә генә ҡалғас, ҡарттар, ул нигеҙҙә йәлсей алмаҫһың бүтән, тигәндәр. Олатай теге бейәһен менеп, сығып китеп, ситтә бер аҙ монаят туплап, кире әйләнеп ҡайтҡас, яңы урынға нигеҙ ҡороп ҡына йәлсеп киткән.

Әсәйемдең үҙенә түмәрҙә уралып ятҡан йылан аяғын сығарып күрһәткән. Һары ғына ине, ти торғайны. Һары аяғын күрһәтһә, кешене һары һағыш, ҡайғы баҫа, тиҙәр бит. Әсәйҙең шунан һуң бер-бер артлы алты балаһы үлеп, икәүһе генә иҫән ҡалған. Атайҙың башына бүрәнә төшкән. Өҫтәүенә, уны, нахаҡҡа ғәйепләп, Колымаға ебәргәндәр. Әсәй йыланды туҡмап үлтергән булған шул. Ғүмер буйы шуға үкенеп йәшәне.

**Таңһылыу БАҺАУЕТДИНОВА.**
**Бөрйән районы.**
**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

КИТАБЕННАС

# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында



### Бәйғәмбәрҙән никах тураһында аңлатыуын һорағандар...

"Һеҙ бергә тыуғанһығыҙ һәм һәр ваҡыт бергә буласаҡһығыҙ, - тигән Ул. - Үлемдең аҡ ҡанаты ҡағылғанда ла, һеҙ бергә буласаҡһығыҙ, ләкин арағыҙҙа азатлыҡ бушлығы һәр саҡ булһын - бер-берегеҙҙе яратығыҙ, ләкин мөхәббәттән бығау яһамағыҙ. Бер-берегеҙҙе тулыландырығыҙ, ләкин бер-берегеҙҙең өлөшөнә инмәгеҙ - үҙегеҙгә тәғәйен икмәк һыныҡын бер-берегеҙгә бирегеҙ, ләкин бер һыныҡты икегә бүлмәгеҙ. Бергә йырлап-бейеп күңел асҡанда ла бер-берегеҙҙең ихтыярын сикләмәгеҙ - лютняның (ҡыллы музыка ҡоралы) ҡылдары айырым булһа ла, көйҙө улар бергә тыуҙыра. Йөрәктәрегеҙҙе бер-берегеҙгә бирегеҙ, ләкин һаҡлау өсөн түгел..."

### Имсәк балалы ҡатын Бәйғәмбәрҙән балалар тураһында һөйләүен үтенгән.

"Һеҙҙең балаларығыҙ һеҙҙеке түгел, улар - үҙ йүнен күргән Тереклектең улдары һәм ҡыҙҙары. Улар һеҙҙең аша тыуа, ләкин һеҙҙән түгел. Һеҙҙеке һаналһалар ҙа, һеҙ уларға хужа түгел. Һеҙ уларға тик һөйөү генә бүләк итә алаһығыҙ, уйҙарығыҙҙы түгел, сөнки уларҙың үҙ уйҙары бар. Өйҙө һеҙ уларҙың тәне өсөн генә төҙөйһөгөҙ, күңелдәре өсөн түгел, сөнки уларҙың күңелдәре һеҙҙең хыялығыҙ етмәҫ Киләсәк тигән өйҙә йәшәй. Һеҙҙең уларға оҡшарға тырышыуығыҙ ихтимал, ләкин балаларығыҙ үҙегеҙгә оҡшаһын тип тырышмағыҙ, сөнки тормош Кисәне көтмәйенсә, алға табан бара. Һеҙ яндан сығып осҡан уҡтарға бәрәбәр. Илаһилыҡ - Уҡсы мәңгелеккә илтеүсе маҡсатты күрә, һеҙҙең уҡтарығыҙ алыҫ һәм тиҙ осһон өсөн Ул һеҙҙе янға оҡшатып бөгә. Уҡсы ҡулында бөгөлөү һеҙҙең өсөн бәхет булһын, сөнки Ул яндан сығып осҡан уҡты ғына түгел, хәрәкәтһеҙ яндың үҙен дә ярата".

### Бер бай әҙәм "Ә нимә ул бүләк?" тип һораған...

"Бүләк биргән саҡта һеҙ үҙегеҙҙә булғандың бик бәләкәй өлөшөн генә бирәһегеҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Үҙегеҙҙе биргән саҡта ғына һеҙ ысын бүләк, сөнки һеҙҙең ҡулығыҙҙағы әйберҙәр, иртән кәрәк булыуы бар, тип ҡурҡып йыйнаған әйберҙәр түгелме ни? Мохтажлыҡтан ҡурҡып йәшәү үҙе үк хәйерселек түгелме? Ҡоҙоҡта һыу бар саҡта ла һыуһыҙ сарсауҙан ҡурҡыу шул уҡ сарсау түгелме ни? Байҙар, ғәҙәттә, булғанының бик әҙен бирә. Биргәндә лә башҡалар күрһен өсөн генә бирә. Шуға күрә уларҙың бүләге әхлаҡһыҙ. Әммә үҙенә етмәһә лә, башҡаларҙы уйлап, бөтәһен дә бирергә әҙерҙәр бар. Ундайҙар йәшәүгә, тормоштоң йомартлығына ышана һәм шуға күрә улар ярлы түгел. Бөтә күңеленән ихлас биргәндәр бар. Улар өсөн бүләк биреү - үҙе бүләк. Бүләкте ытырғанып биргәндәр бар. Ундайҙар өсөн бүләк биреү - ғазап. Бүләкте бер ни тураһында уйламайынса, эскерһеҙ биреүселәр була. Уларҙың бүләге туғайҙағы сәскә хуш еҫ таратыуына бәрәбәр. Хоҙай бына шундайҙарҙың ҡулы аша ижад итә, уларҙың күҙҙәре менән йылмая.

Һорағанға биреү насар түгел, ләкин һорамағанға үҙең белеп биреү яҡшыраҡ, сөнки уның шатлығы бүләк биреүгә ҡарағанда ла көслөрәк. Бүләк - ул шатлыҡтың ҡанаттары. Биреүҙе бурыс һымаҡ күреү - ул ерҙә Хоҙай тарафынан бирелгән йомартлыҡ барлығына ышанмау".

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 26-сы һанда).**

✓ *"Һин ерҙәге кешеләрҙе миңә ебәрергә тейешһең, әммә һин әле генә минең яратҡан бер әҙәмемде минән алыҫлаштырҙың. Һинең был кешегә өйрәткән "дөрөҫ" доғаларың доға түгел, сөнки доғалар ҡағиҙә буйынса ҡылынмай..."*



*ӘЙҘӘГЕҘ...*

**Мәхәллә имамының мәсеткә беренсе тапҡыр аяҡ баҫҡан йәш егеткә "Сәждәгә дөрөҫ китмәйһең", тип ҡаты итеп шелтәләүен, сәждәгә киткәндә ҡулындағы таяғы менән арҡаһына баҫып-баҫып алыуын һөйләгәйне бер танышым. Дин юлында тәүге аҙымдарын яһаған теге егет һуңынан бер аҙ төңөлөп йөрөнө. Дин эшмәкәренең (бындай осраҡтарҙа уларға дин әһеле, йә хәҙрәт тип әйтергә тел әйләнмәй) шулай ҡыланыуы оҙаҡ ваҡыт уның күңелен әсетеп торҙо, "Мосолмандар ни өсөн шундай ҡаты бәғерле ул?" тигән һорау борсоно уны.**

# КЕШЕЛӘРҘЕ ДИНДӘН ДҮНДЕРМӘЙЕК!



Ысынлап та, беҙгә, мосолмандарға, ғибәҙәтле генә түгел, әҙәпле, әхлаҡлы дини кеше булырға ла өйрәнергә кәрәк әле. Үкенескә ҡаршы, әҙәп, әхлаҡты һанламау, кешеләр менән аралашыуҙы дөрөҫ ҡора белмәү, кәрәкмәгән урында артыҡ ҡаты, йә иһә йомшаҡ булыу, эргә-тирәләге кешеләрҙең күңел торошон һиҙә белмәү дин хәҡиҡәттәренең халыҡҡа еткерелеүен тотҡарлап торған проблемаларҙың береһе булып ҡала. Иң ҡыҙғанысы, был етешһеҙлектәр әле генә ғибәҙәт юлына баҫҡандарға ғына түгел, диндә үҙен күптән тип һанағандарға ла хас күренеш. Аҙ ғына белеме менән үҙен ғалим итеп күрһәтеү маҡсатын алға һөргән, үҙенең кейеменең, ҡиәфәтенең сөннәткә ярашлы булыуынан тәкәбберләнгән, үҙе кеүек уйламағандарҙың, үҙе кеүек диндар булмағандарҙың етешһеҙлектәрен асып һалыуҙан ләззәт тапҡан һәм башҡаларҙы түбәнһеткән кешенең иманынан ни фәтүә? Хәҙистәрҙә телгә алынған башҡа кешенең намыҫына, хаҡына теле, ҡылыҡтары, мөнәсәбәте менән дә ҡул һуҙмаҫҡа тейешле мосолмандар ҡайҙа?

Намаҙ уҡыу, ураҙа тотоу, ҙур гонаһтарҙан йыраҡ тороу, дин ҡушҡанса кейенеү, һис шикһеҙ, оло ихтыяр көсө, ҡыйыулыҡ талап итә. Үҙен камиллаштырыу өҫтөндә эшләп, рухи бейеклектәргә күтәрелә алғандар көсһөҙ кешеләр түгел. Әммә әжер, ҡеүәтләү - Аллаһтан. Тормош та бер көн менән генә тамамланмай, ахырыбыҙ ниндәй булыры, һис шикһеҙ, беҙҙең доғаларыбыҙҙан, тырышлыҡтарыбыҙҙан, күңел торошобоҙҙан торһа ла, тик Хаҡ Тәғәлә генә уның нисек булырын белә. Шуға күрә лә мәсеттәребеҙҙә, өйҙәребеҙҙә үткәргән сараларыбыҙ әле саҡ дин юлына баҫып йөрөгәндәрҙе йыраҡлаштырыусы, этәреүсе, уларҙың күңелен ҡырыусы сәбәпкә әйләнергә тейеш түгел.

Инде үҙен ныҡлап дин юлында тип һанағандарға, төрлө кимәлдәге хәҙрәттәргә, дин әһелдәренә, үҙҙәрен мосолман итеп күрһәтеп йөрөгән һәм ошо "бренд" аҫтында эшмәкәрлек алып барған кешеләргә мөрәжәғәт итер инем. Кемгәлер шелтә яһар, аҡыл өйрәтер, тура юлға өндәр алдынан түбәндәге нәмәләр хаҡында ла онотмайыҡ. Һис шикһеҙ, ислам хаҡ дин, Аллаһы Тәғәлә хаҡ, уның талаптары хаҡ, Ҡиәмәт хаҡ, йәннәт һәм йәһәннәм хаҡ. Беҙ быға инандыҡ һәм башҡаларҙың да ошо уҡ хәҡиҡәткә инаныуын теләр инек. Әммә һәр нәмәнең үҙ ваҡыты, үҙ ысулы, үҙ талаптары, һәм ахырҙа ниндәй юлдан барыуҙы һәр кем үҙе генә һайлай, хәл итә. Уның да үҙ инаныуҙары, ҡиммәттәре бар. Бәлки, уның ҡараштарын беҙ бөтөнләй ҡабул итә, аңлай ҙа алмайбыҙҙыр, бәлки, уның һайлаған юлы нигеҙҙән хаталыр. Әммә һәр ваҡыт кешеләрҙе берләштергән дөйөм ҡиммәттәр ҙә була. Айырмалыҡтарға түгел, беҙҙе берләштергән әйберҙәргә баҫым яһайыҡ. Илебеҙ, телебеҙ, милләтебеҙ, хөрмәт иткән кешеләребеҙ бер, бер үк кешелек сифаттарын хуп күрәбеҙ. Хатта әлеге мәлдә динде бөтөнләй инҡар итеүсе кеше менән дә дөйөм фекергә килеп, уның күңеленә инергә була. Ә инде дин юлына баҫтым ғына тигән, дингә хөрмәт менән ҡараған кешеләрҙең бәләкәй генә хаталарынан, етешһеҙлектәренән трагедия эшләп, уларҙың күңелен төшөрөү, уларҙы ситләштереү Аллаһы Тәғәленең ризалығын алырға ярҙам иткән эш микән?..

Әйткәндәремде йөпләп, бер риүәйәт килтереп үтәйем. Бер дин әһеле мәсеттән ҡайтышлай таныш йортҡа инеп, унда йәшәүселәрҙең хәл-әхүәлен белешеп сығырға була. Барып инһә, йорт хужаһы тубыҡланып доға ҡылып ултыра һәм сүрәләр урынына ниндәйҙер буталсыҡ һүҙҙәр һөйләй: "Әй, Хоҙайым, - тип мөрәжәғәт итә был кеше Аллаға, - Һиңә яҡынларға булышлыҡ ит. Һинең тәнең бысранғанда, мин Һине йыуындырырға вәғәҙә бирәм. Мин бик яҡшы итексе, һиңә итек тегеп бирермен. Һине берәү ҙә хәстәрләмәгәндә, мин Һинең эргәңдә булырмын. Ауырыһаң, Һиңә дарыу алып килермен, ҡарармын. Мин ашарға ла оҫта бешерәм..." Дин әһеле танышының был доғаларын Хоҙайҙы мыҫҡыл итеү һымаҡ ҡабул итә һәм уны бүлдереп, ҡыҫҡырып уҡ ебәрә: "Туҡтат был ахмаҡлығыңды! Нимә һөйләйһең һин? Хоҙайға нимәгә кәрәк һинең итегең? Һин нисек итеп Уны йыуындырмаҡсыһың? Ул һинең ашарға әҙерләүеңә мохтаж тип уйлайһыңмы? Кемдән өйрәндең бындай доғаларға?" Йорт хужаһы уңайһыҙланып ҡына былай ти: "Мин доға ҡылырға берәүҙән дә өйрәнмәнем. Мин бик наҙан һәм ярлы кешемен. Башҡа эштәрҙе нисек итеп үҙем белгәнсә башҡарһам, доғаларҙы ла үҙем белгәнсә генә ҡылам. Ғөмүмән, үҙемдең шәхси тәжрибәм менән доғаларыма әйләнде. Мине дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәт улайһа, үтенеп һорайым..." Дин әһеле йорт хужаһын дөрөҫ итеп доға ҡылырға өйрәтә һәм уның ихлас рәхмәтенә лайыҡ була. Илай-илай оҙатып ҡала ул дин әһелен. Дин әһеле лә, изге эш эшләнем, тип, бик ҡәнәғәт ҡала. Хоҙай күрәме, беләме, тигән һымаҡ, ҡараштарын күккә төбәһә, Хоҙайҙан шундай һүҙҙәр килә: "Һин ерҙәге кешеләрҙе миңә ебәрергә тейешһең, әммә һин әле генә минең яратҡан бер әҙәмемде минән алыҫлаштырҙың. Һинең был кешегә өйрәткән "дөрөҫ" доғаларың доға түгел, сөнки доғалар бер ниндәй ҡағиҙә буйынса ла ҡылынмай..."

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

*КӨЛӨП АЛАЙЫҠ!*

## ТӘРБИӘ ДӘРЕСТӘРЕНӘН

Мәсет ҡарамағындағы мәҙрәсәлә уҡып йөрөгән Хужа Насретдин үҙенең шуҡлыҡтары өсөн бик йыш уҫал хәлфәнән шелтә ала. Ләкин арт һабағын ҡайыҙлаған тал сыбығынан ул ҡурҡмай, төртмә телле көләмәстәр сәсеүҙе дауам итә. Бер ваҡыт дәрес ваҡытында хәлфәгә ҙур ғына тәрилкә менән хәлүә килтерәләр. Тап шул ваҡыт уны бүлмәнән ҡатыны саҡырып сығара. "Балалар! - ти хәлфә. - Мин һеҙҙе бер аҙға ҡалдырып китәм. Тауышланмай ғына ултырығыҙ. Тәрилкәләге хәлүәгә тейә күрмәгеҙ - ул ағыулы".

Хәлфә сығып китеү менән Хужа Насретдин хәлүәне алып, тигеҙ өлөштәргә бүлә лә, шәкерттәргә таратып бирә. Хәлүәнең һуңғы валсыҡтарын ҡапҡылап торғанда, хәлфә килеп инә. "Хәлүәне кем ашаны?" - тип һорай ул асыуланып. "Мөғәллим әфәндем, - ти Насретдин, - мин һеҙҙең ҡәләм бәкеһен һындырҙым. Шул көйөнөстән, ағыуланып үләйем, тип, хәлүәне ашап ҡуйҙым. Ағыуы етерлек булмаған икән..."

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Эгоизмдың бәҫе

### Уҡымышлы эгоизм зарурлығы

Йәмғиәтебеҙҙә һеҙҙең башҡалар хаҡына үҙегеҙҙе ҡорбан итергә тейешлегегеҙ хаҡында тылҡып торған төркөм һәр саҡ бар. Әгәр ошо алдаҡҡа ышанһағыҙ, үҙегеҙҙе нужала, бәхетһеҙлектә һәм үҙ-үҙегеҙ менән ҡәнәғәтһеҙлеккә, тормошҡа ашмаҫ хыялдарға һәм уртаса йәшәүгә дусар итәсәкһегеҙ. Үҙегеҙҙе ҡорбан итеүҙе башҡалар үҙ маҡсаттарында файҙаланасаҡ, һәм был оҙаҡҡа һуҙылғанда, физаҡәрлегегеҙ һеҙҙе тамам бөтөрәсәк. Тормошта һеҙҙең үҙ бәхетегеҙҙе ҡорбан итеп, әйләнә-тирәләгеләрҙең хуплауына лайыҡ булыуҙан башҡа маҡсатығыҙ юҡ. Был - алйотлоҡ, кешене емереүсе тәжрибә, әммә бик күп көстәр һеҙҙе тап шуға программаларға тырышасаҡ.

Мин үҙем 30 йыл кешеләргә ярарға тырыштым, әммә аңдың был көйләнеше бер сәғәттә - ресторанымды һалым түләмәгән өсөн конфискациялап, судта аукциондан һатҡан саҡта селпәрәмә килде. Аңлайһығыҙмы, мин барыһына ла ярарға тырыштым, ҡул аҫтында эшләүселәрем мине яратһын, тип уйланым, ә улар миңә ышанманы, сөнки уларға "бил бөккән бай" булып күҙалландым. Әлбиттә, ул ваҡытта мин бай ҙа түгел инем. Улар минән вазифа һәм премиялар көттө, ә мин улар теләгәнсә эшләһәм, аҡса юғалтасағымды аңлатырға тырыштым. Улар миңә, бай булғас, быны эшләй алаһың, ә беҙгә күберәк аҡса эшләргә кәрәк, тип яуапланы.

Шул ваҡытта урындағы, штат һәм федераль хөкүмәт коалицияһы килемемдән күберәк һалым таптырҙы; тик мин улар һорағанса түләһәм, үҙемдең хеҙмәткәрҙәремә түләй алмаҫ инем. Шуға ла һалым сығымдарын ҡыҫҡартып, эш хаҡы түләнем, һөҙөмтәлә нимә килеп сыҡҡанын беләһегеҙ. Әммә ҡыҙыҡ хәл булды: ресторанымды юғалтып, кәмәм ҡомға терәлеү менән мине бер ваҡытта ла яратмаған һәм миңә ышанмаған хеҙмәткәрҙәрем - сөнки улар уйынса мин бик бай инем - ҡапыл ғына мине ярата һәм ышана башланы. Мин улар өсөн үҙ кеше булып киттем - ҡорбандар рәтенә баҫтым.

Был минең өсөн ҙур һабаҡ булды. Мин булған нәмәмде хеҙмәткәрҙәремә биреп, үҙемә бер нәмә лә ҡалдырманым. Елкәмдә 10 йылға иректән мәхрүм итергә сәбәп булған бурыс ҡына ята ине. Мин башҡаларға хеҙмәт итеү хаҡына үҙемде ҡорбан иттем. Улар барыһы ла икенсе йылы урындарға таралышып бөттө. Шулай итеп, мин тәү сиратта үҙең хаҡында хәстәрлек күрергә кәрәклеген төшөндөм. Ә инде уңыш тураһында күберәк белгән һайын, кешегә бары тик үҙ мәнфәғәтен генә уйлап йәшәргә ярамағанлығын, ә уның маҡсат менән нығытылған булырға тейешлеген аңланым.

Барыһы ла фундаменталь, тәрән тамырланған ҡиммәттәрҙән, йәғни беҙҙең өсөн мөһим булған нәмәләрҙән башлана. Сөнки улар көн һайын ҡылынған ғәмәлдәребеҙ менән идара итә. Был ҡиммәттәр тормошобоҙҙағы иң төп маҡсатҡа нигеҙләнә һәм һеҙ ни өсөн өйөр кешеләре ғүмерен аҡылһыҙ сарыф итә, ауырый һәм ярлылыҡта үткәрә икәнлеген бик тиҙ аңлайһығыҙ.

**Рэнди ГЕЙДЖ.**

✓ *Мотлаҡ баш кейемендә йәки зонт ышығында йөрөгөҙ. Бигерәк тә теплица, барлыҡ физик әүҙемлек талап иткән эштәрҙе ҡояштың ныҡ ҡыҙҙырған ваҡытында - иртәнге 11-ҙән киске 4-кә тиклем туҡтатып тороғоҙ.*



СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ЭҪЕ ҺУҠҺА...



**Белгестәр белдереүенсә, эҫе көндәр бик күп ауырыуҙарҙың көсәйеүенә килтерә. Уны бигерәк тә йөрәк-ҡан тамырҙары сирлеләр ауыр кисерә. Бындай көндәрҙә махсус йәшәү рәүешенә күсергә кәрәк, ти медиктар. Был режим ниндәйҙер сире булыусыларға ғына түгел, хатта үҙен сәләмәт тип иҫәпләүселәргә лә ҡағыла.**

Төп иғтибарҙы һыу эсеүгә бүлегеҙ. Көнөнә литр ярым - ике литр һыу эсеү мотлаҡ. Әгәр эҫе көндә физик эш эшләһәгеҙ, тағы ла күберәк һыу эсегеҙ. Һыуһынды морс, кеүәҫ һәм бигерәк тә эҫе сәй баҫа. Артыҡ ашамағыҙ, ризыҡ еңел, бигерәк тә йәшелсә-емештән торорға тейеш. Алкоголь ҡулланыу тыйыла.

Эҫе көндә асыҡ төҫтәге тәбиғи туҡымаларҙан тегелгән (мамыҡ, етен) иркен кейем кейегеҙ. Мотлаҡ баш кейемендә йәки зонт ышығында йөрөгөҙ.

Баҡса, бигерәк тә теплица, барлыҡ физик әүҙемлек талап иткән эштәрҙе ҡояштың ныҡ ҡыҙҙырған ваҡытында - иртәнге 11-ҙән киске 4-кә тиклем туҡтатып тороғоҙ.

Тәҙрәләрҙе асығыҙ, ябыҡ биналарҙа һауа әйләнешен булдырыу, шулай уҡ бүлмәлә эшмәкәрлек өсөн оптималь булған температура (21-23 градус) тотоу маҡсатынан вентилятор йәки кондиционер файҙаланығыҙ.

Машинағыҙҙы ҡояшта ҡалдырмағыҙ һәм эҫе машинала 10 минуттан артыҡ ултырмағыҙ.

Эҫелә ауыр физик көсөргәнештән һаҡланығыҙ, эшләгәндә ваҡыты-ваҡыты менән ял итегеҙ.

Табиптар ҡояш тейеүгә ҡарағанда эҫе тиҙерәк тейә, тип билдәләй. Сөнки эҫе һуғыу өсөн ҡояш төп шарт булып тормай. Йылы, һауа индермәгән кейемдә оҙаҡ эшләгәндә лә, һауа булмаған бинала оҙаҡ эшләгәндә лә эҫе тейеүе мөмкин.

Эҫе һуғыу - организмдың саманан тыш йылыныу арҡаһында тәндең нормаль температураны тота алмаған ауыртыулы торошо. Сөнки йылылыҡ булдырыу процестары көсәйә, бер үк ваҡытта йылылыҡ биреү кәмей һәм был йәшәү функцияларының етди боҙолоуына килтерә.

Эҫе тейеүҙең симптомдары: тән тиреһе ҡыҙара; тын ҡысыла; һыуыҡ тир бәреп сыға; хәлһеҙлек күҙәтелә; күңел уйнай; укшыта; температура күтәрелә; баш әйләнә; күҙ алды ҡараңғылана, галлюцинация башлана; күҙ ҡараһы ҙурая; баш ныҡ ауырта; пульс йышая һәм саҡ һиҙелә; тын алыу йышая; тән тиреһе эҫе һәм ҡоро була; мускулдар ауырта һәм тартыша; ныҡ ауыр осраҡтарҙа - галлюцинация башлана, ҡорошҡаҡ тота, бәүел тотмай, аң юғала, йоҡоһоҙлоҡ йонсота, шулай уҡ, киреһенсә, йоҡо баҫыуы ла мөмкин.

Эҫе һуҡҡанда тиҙ ярҙам саҡырырға кәрәк. Табип килгәнсе, беренсе ярҙам күрһәтеү мотлаҡ: зыян күреүсене күләгәгә йәки яҡшы вентиляция булған бинаға, йылылыҡ сығанағынан алыҫҡараҡ, һалҡынға күсерергә, мотлаҡ арҡаһына яткырырға һәм һауа елпеп торорға кәрәк. Башы һәм аяғы аҫтына ниндәй ҙә булһа әйбер һалынырға тейеш. Уның өҫ кейемен һалдырыу, бигерәк тә муйынын һәм күкрәген ҡыҫып торған кейемдәрҙән азат итеү, салбар ҡайышын бушатыу, әгәр кейем синтетика йәки ҡалын туҡыманан икән, уны бөтөнләй систереү зарур. Тәнен еүеш простыня менән ураурға йәки һалҡын һыу бөркөп торорға кәрәк. Битен һалҡын һыу менән йыуығыҙ. Шәкәр йәки тоҙ менән болғатып, күп итеп һалҡынса һыу, минераль һыу булһа яҡшыраҡ, эсерегеҙ. Валериана тәнәтмәһе ныҡ ярҙам итә: стакандың өстән бер өлөшө һалынған һыуға 20 тамсы тамыҙып бирегеҙ. Әгәр зыян күреүсенең хәл-торошо мөмкинлек бирһә, уға ҡаты сәй йәки кофе эсерергә мөмкин. Башына һалҡын компресс ҡуйығыҙ. Водитель аптечкаһындағы гипотермик пакетты файҙаланырға ла була. Кешенең аны томаланғанда уға нашатыр спирты быуҙарын еҫкәтергә, ҡолаҡ япраҡтарын, еҫкә иренен ныҡ итеп ыуырға кәрәк. Тын алышы йәки йөрәге туҡтағанда яһалма һулыш алдырығыҙ, тын ала башлағансы һәм пульсы барлыҡҡа килгәнсе йөрәгенә массаж эшләгеҙ.

Эҫе һуҡҡандан һуң табиптар бер нисә көн урында ятырға кәңәш итә. Ошо ваҡытта организмда нервылар системаһы, ҡан әйләнеше, ҡайһы бер биохимик реакциялар эшмәкәрлеге тергеҙелә.

Эҫе һуғыуҙың теләһә ниндәй формаһы ла, әгәр ваҡытында ярҙам күрһәтелмәһә, ғүмергә һәм сәләмәтлеккә хәүеф менән янай.

Ғәҙәттә эҫе һуғыу мөхиттең ҡапыл эҫеүенә тиҙ генә күнегә алмаған кешеләрҙә - йәш балаларҙа, балаларҙа, ололарҙа, хроник ауырыуҙары булыусыларҙа күҙәтелә. Шулай уҡ йөрәк-ҡан тамырҙары сирлеләрендә, тире ауырыуҙары тәндең ҙур өлөшөн алып торған дерматологик сирлеләрҙә проблема тыуыуы мөмкин.

ҠЫҘЫҠ ТАҺА!



# КЕШЕ ТУРАҺЫНДА

● Кешенең мейе күләме 4 терабайттан ашып китә.

● Ете айға тиклем бала бер юлы тын алыу һәм йотоу һәләтенә эйә.

● Баш һөйәге 29 төрлө һөйәктән тора.

● Сөскөргәндә организмдың бөтә функциялары ла, хатта йөрәк тә тибеүҙән туҡтай.

● Нервы импульсы мейенән сәғәтенә 274 километр тиҙлек менән хәрәкәт итә.

● Бер кешенең мейеһе бер көн дауамында донъялағы бөтә телефондарҙан да күберәк электр импульстары тыуҙыра.

● Кешенең тәнендә 900 ҡәләм етештерерлек углерод, 7 киҫәк һабын эшләрлек май һәм 50 литрлыҡ мискәне тултырырлыҡ һыу бар.

● Ошо һөйләмде уҡыған арала тәндә 50 мең күҙәнәк үлә һәм яңылары менән алмашына.

● Яралғы (бала) 3 айҙа үҙенә генә хас бармаҡ эҙҙәренә эйә була.

● Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөрәге ир-егеттәрҙекенә ҡарағанда шәберәк тибә.

● Уң ҡул менән яҙыусылар, һул ҡуллыларға ҡарағанда, уртаса 9 йылға күберәк йәшәй.

● Кешеләрҙең яҡынса өстән ике өлөшө үбешкәндә баштарын уңға эйә.

● Күргән төштәренең 90 процентын кеше онота.

● Тәндәге ҡан тамырҙарының оҙонлоғо яҡынса 100 мең километр.

● Ғүмере аҙағына кеше яҡынса 150 триллион бит мәғлүмәтте иҫендә ҡалдыра.

● Тән йылылығының 80 проценты баш аша сыға.

● Кеше ҡыҙарғанда унын ашҡаҙаны ла ҡыҙара.

● Һыуһау тойғоһо тән ауырлығының 1 процентына тиң һыуҙы юғалтҡанда барлыҡҡа килә. 5 проценттан артыҡ һыуҙы юғалтыу иҫте юйыуға, ә 10 проценттан күберәге үлемгә килтерергә мөмкин.

● Кеше тәнендә 700 тирәһе фермент (организмда барған төрлө химик реакцияларҙы тиҙләтеүгә ярҙам итеүсе органик матдәләр) эшләй.

● 4 йәшлек бала көн дауамында уртаса 450 һорау бирә.

● Донъялағы бактерияларҙың тик 1 проценты ғына кешелә ауырыу барлыҡҡа килтерә.

● Кендектең фәнни исеме - умбиликус.

**(Дауамы бар).**

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Июль (Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 6 (20) дүшәмбе | 3:20 | 4:50 | 13:30 | 20:20 | 21:50 | 23:20 |
| 7 (21) шишәмбе | 3:21 | 4:51 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 8 (22) шаршамбы | 3:22 | 4:52 | 13:30 | 20:19 | 21:49 | 23:19 |
| 9 (23) кесе йома | 3:23 | 4:53 | 13:30 | 20:18 | 21:48 | 23:18 |
| 10 (24) йома | 3:24 | 4:54 | 13:30 | 20:17 | 21:47 | 23:17 |
| 11 (25) шәмбе | 3:25 | 4:55 | 13:30 | 20:16 | 21:46 | 23:16 |
| 12 (26) йәкшәмбе | 3:26 | 4:56 | 13:30 | 20:15 | 21:45 | 23:15 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театры

**ШОС һәм БРИКС халыҡ-ара саммиттары уңайынан Башҡортостандың һәр мәҙәни учреждениеһы мәҙәни программа әҙерләй. Мәжит Ғафури исемендәге Башкорт академия драма театры сит ил ҡунаҡтарына башҡорттарҙың менталитетын һәм ғөрөф-ғәҙәттәрен сағылдырған спектаклдәр тәҡдим итә.**

**6 июлдә** баш ҡала халҡы һәм ҡунаҡтар Баязит Бикбайҙың һәм Хәмит Иргәлиндың **"Ҡаһым түрә"** драмаһын (режиссеры - Олег Ханов) ҡарай ала. Спектакль 1812 йылғы Ватан һуғышы геройы Ҡаһым Мырҙашевҡа арналған.

**7 июлдә "Руди - Never off"** спектакле (режиссеры - Айрат Абушахманов) сәхнәгә ҡуйыла. Бында билдәле балет бейеүсеһе Рудольф Нуриев хаҡында һүҙ бара. "Уның бала сағында күргән ауырлыҡтары, тормош һынауҙары хаҡында белмәүселәр бөтә донъяла танылыу яулаған бөйөк бейеүсенең көслө характерын аса", - тип билдәләй авторҙар.

**8 июлдә** театр Мөхәмәтша Буранғоловтың **"Шәүрәкәй"** музыкаль комедияһын (режиссеры - Айрат Абушахманов) тәҡдим итә.

**9 июлдә** Таңсулпан Ғарипованың **"Маҡтымһылыу, Әбләй һәм Ҡара Юрға"** мюзиклы (режиссеры - Олег Ханов) күрһәтелә.

✓ *Беренсе тирмәлә башҡорттарҙың көнкүреше сағылдырыласаҡ: унда республиканың аҫаба халҡы көндәлек тормошта ҡулланған йыһаздар (һандыҡтар, балаҫтар, көнкүреш әйберҙәре) урынлаштырыласаҡ.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# БАШҠОРТОСТАН - ЙӘЙҒОР ТӨҪТӘРЕНДӘ

**Конгресс-холл эргәһендә төҙөлгән "Ватан" этнопаркы Башҡортостандың мәҙәниәтен сағылдырған йәйғор төҫөндә балҡыясаҡ. Бөгөн "этника", йәғни төбәктәрҙең милли һәм башҡа үҙенсәлектәренең донъя тренды булып тороуын иҫәпкә алып, ойоштороусылар шундай юл менән республиканы ШОС һәм БРИКС илдәре башлыҡтары саммитына килгән ҡунаҡтарға күрһәтәсәк.**



Беренсе тирмәлә башҡорттарҙың көнкүреше сағылдырыласаҡ: унда республиканың аҫаба халҡы көндәлек тормошта ҡулланған йыһаздар (һандыҡтар, балаҫтар, көнкүреш әйберҙәре) урынлаштырыласаҡ. Бында тирмә биҙәү өсөн күп һанлы экспонаттар Милли музейҙан алына.

Икенсе тирмә халыҡ кәсепселегенә бағышлана, унда кейеҙ баҫыу, ағасты семәрләп эшләү, ҡымыҙ бешеү кеүек кәсептәр күрһәтелә.

Өсөнсө тирмә ер аҫты байлыҡтары менән таныштыра. Бында һүҙ нефть тураһында ғына бармай, сөнки Башҡортостанда Менделеев таблицаһының бөтөн элементтарын табырға була.

Дүртенсе тирмәлә крайҙың тәбиғәте, уның байлыҡтары, бал һәм ҡымыҙ менән таныштырға, шунда уҡ был тәбиғи продукттарҙы тәмләп ҡарарға ла мөмкин.

Бишенсе тирмә - толерантлыҡ мөйөшө: республика элек-электән күп милләттәрҙең дуҫ һәм татыу йәшәүе менән билдәле.

Алтынсы тирмәлә милли кейемдәр кейеп ҡарарға һәм фотоға төшөргә, милли йолаларҙы күрһәтеүҙә ҡатнашырға мөмкин буласаҡ.

Етенсе тирмәлә Өфөнөң киләсәге күрһәтеләсәк. Архитектура проекттары, ҡала төҙөлөшө планы, күперҙәр, юлдар, юл сиселештәре, ҡыҫҡаһы, бер нисә йылдан баш ҡала үҙ йөҙөн тағы ла күркәмләндерәсәк икәне асыҡ сағылдырыласаҡ бында.

ӘЙТЕШ

# ЯҠШЫҒА ВАҠЫТ ЕТТЕ...

**Гәзитебеҙҙең 25-се һанынан алып шиғри әйтештә Ягылса менән Супай сәсәндәр дауам итә. Үткән һанда Ягылса Супай сәсәнгә:**

Һүнгән усаҡ ялҡынланып
Ҡабынырмы?
Сәсәнлекте юғалтҡанбыҙ,
Табылырмы? - тип, әйтеш юҫығына һорау өҫтәгәйне.

**Супайҙың Ягылсаға яуабы:**

Һүнгән усаҡ ҡабынмаҫы
Мәғлүм инде, ҡайҙа ут,
Ҡабаттан яндырыу кәрәк
Исмаһам, осҡон табып.
Ә ул осҡон күңелдәрҙән
Китмәгән бит әлегә.
Ҡабат дөрләп яныр өсөн
Көтә унай мәл генә!
Унай форсат юҡ шул әле,
Күпме бар һорашҡаным:
Халыҡ тәкрар итә бары
Яланда аҙашҡанын.
Борон тиеп һөйләмәйек,
Замандар төрлө була,
Тик һәр бер осорҙан да бит
Тик үҙ сәсәне ҡала.
Хәҙер шиғыр ятлау юҡ бит,
Йыры ла - караоке.
Көйөн тыңлап, һүҙен уҡып
Йырлау беҙгә бик йәпле.
"Урал батыр"ҙы ла ятҡа
Һөйләүселәр бар булай,
Ғәбит сәсәндән дә уны
Яҙған Буранғол ағай.
Сәсән тигән данлы ирҙәр
Тыуып тормаҫ көн һайын,
Быуат үткәс, тағы берәү
Килеп сығыр, моғайын.
Онотолмай тиҙәр ҙә һүҙ
Бала сағында белгән,
Әле үҫеп килгән быуын
Кәмдер, тиһегеҙ кемдән?
Килеп сығыр берәй Хәбит,
Йә Хәмит тигән сәсән, -
Уның өсөн рух, күңел бар,
Бар тағы ла дәрт һәм сәм.
Юҡҡа илап ултырмайыҡ,
Әҙ тип шағир, сәсәнлек,
Ул тик көлкө булыр ине -
Хәҙер барлап китәрлек:
Әйтеш әле, ошоғаса
Тарихтарға күҙ һалып,
Ҡасан тағы булғаны бар
Шунса шөһрәтле халыҡ?
Һәр икенсе - "Халыҡ" данлы
Яҙыусы һәм шағирҙар,
Ана шулар сәсәнлекте
Өлгө итеп алырҙар,
Ҡалын "кирбес"тәрен тотоп,
Сәхнәләргә сығырҙар,
Һәм сәсәнлек төшөнсәһен
Яңы биткә яҙырҙар!

**Ягылсаның Супайға яуабы:**

Сәсәниәләр ҙә булған,
Берене - Ғилмияза.
Хәҙерге сәсәниәбеҙ
Үҙгәртеп эпос яҙа.
Уҙған быуатта ла булған,
Беҙҙә сәсән-шағирҙар.
Яҙғандары партияны,
"Ағайҙарын" маҡтауҙар.
Мин дә һиненсә уйлайым,
Сәсәнлек бар ул, боҫҡан.
Дөрләп янып китһен өсөн
Бары кәрәктер осҡон.
Тағы ла бирәм һорау,
Түгел ҡатмарлы, урау.
Ниңә әле һуң ниңә,
Ниңә һаман да ниңә,
Беҙҙе күрә алмағанды,
"Игеҙәк"кә һанайбыҙ?
Әллә үтә һармаҡбыҙмы?
Әллә ҡолаҡ һалмайбыҙ?
Ырыуың һинең ҡайҙан?
Һиҙемләйем, ҡатайҙан.
Һеҙ килмәгән Ҡытайҙан.
Шулай тиеп уйлаусылар,
Ҡолап төшкәндер айҙан.
Ҡуйсы ҡый, ҡуйсы ҡый,
Арабыҙҙа күп шул ҡый.
Күп шул ҡый...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Бәйгелә әйтеш ҡорорға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бирелә.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә әйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЯҠШЫҒА ТИҢ ЮҠ,

## яманға иң юҡ

Аҡыллы тигәнең маҡтана башлаһа, тинтәк тип иҫәплә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл:" Хоҙай ерҙе һәм ундағы тереклекте, йән эйәләрен яралтҡандан һуң, барыһын да матурлыҡ менән бүләкләй. Ә бына аҡылды Ул кеменәлер аҙыраҡ, кеменәлер күберәк итеп, самалап өләшә. Ер үҙ ҡанундары менән йәшәй башлай. Үҫемлектәр, ағастар үҫә, сәскә ата, уларҙың матурлығы Хоҙайҙы сикһеҙ шатландыра. Тик Уны тере йән эйәләренең ҡайһы берҙәренең матурлыҡ менән мөрхәтһенмәйенсә, ерҙә алла булырға ынтылыуы ғына борсой. Арыҫлан - бөтә кейектәрҙең, кеше бөтә тәбиғәттең батшаһына әйләнә бара.**

**Ә йылан иһә аҡыл батшаһы булырға ынтылып, барыһына ла аҡыл һата. Бәләкәйерәк һәм күҙгә бик үк салынып бармаған сағында әле ул буйһоноусан була, матур ғына итеп аҡыл-кәңәштәр бирә. Ләкин уны берәү ҙә тыңламай һәм аҡыл батшаһы итеп танымай. Был хәл йыланды үтә ныҡ асыуландыра. Асыуы эсенә йыйылып, ағыуға әйләнә. Ағыуға эйә булғандан һуң, йылан кәңәш биреүҙән туҡтай һәм үҙен тыңламаусыларҙы саға башлай. Ләкин ерҙәге бар йән эйәләрен дә үҙенән ҡурҡырға мәжбүр итә алмай, киреһенсә, ул йән эйәләренең ҡайһыһылыр үҙен иҙеп ташлай, хатта йотоп ебәрә. Шунан йылан үҙенең ағыуын үлемеслегә әйләндерә. Уның ағыуына тарығандар яҡты донъя менән хушлаша. Йыланға күренмәй генә үләндә шыуышып йөрөү ҙә оҡшамай башлай. Ул бер-бер артлы үҙенең тиреһен үҙгәртә, ялтырауыҡтарға төрөнә, уға бағыусыларҙың күҙҙәрен һуҡырайтырға теләй. Ләкин берәүҙең дә күҙе һуҡыраймай. Шунан йылан ҙур булып үҫеп, тәбиғәттәге бар йәнлектәрҙе ҡурҡытырға була. Ләкин үҫеп-үҫеп тә, тәбиғәттәге иң ҙур йәнлектәр кимәленә етә алмай, сөнки Хоҙай уға был мөмкинлекте бирмәгән була бит. Шулай итеп, йылан был юлы ла башҡаларҙан өҫкә сыға алмай. Ул шул тиклем асыулана, асыуынан муйыны яға кеүек ҡабара. "Ярай, был яға миңә батша төҫө бирер", тип ҡыуана ул. Ләкин был да уны батша итә алмай. Шунан йылан барыһын да гипнозы менән арбарға тотона. Әммә уның был һәләтлеге лә ҡурҡыта алмай тере йән эйәләрен. Шунан ул: "Ярай, ерҙә батшалар күп, ә мин Алла булам!" - тип һығымта яһай. Уның һүҙҙәрен Хоҙай ишетә. Йыланға аҡылды бик аҙ биргән икәнен, ләкин башы бәләкәй булғас, уға тағы аҡыл өҫтәп булмауын аңлай. Шулай Хоҙай йыланды аҡылһыҙ көйө ҡалдыра. Ерҙәге тереклеккә һәм йән эйәләренә зыян килтермәһен өсөн, уны ер аҫтына йәшерә. Шулай итеп, ҡоштар күктә оса, йәнлектәр ерҙә йөрөй. Ә йыландар ер аҫтында көн күрә. Улар, әлбиттә, матур. Уларҙың ағыуына тиң ағыу юҡ. Уларҙың гипнозы ла хәтәр. Ләкин Хоҙайҙың йыланда эше юҡ. Йыландар Хоҙай һәм башҡа йән эйәләре тарафынан инҡар ителеп, ерҙә шыуышып йөрөй бирә. Күпте көҫәгәндәр шундай яҙмышҡа дусар була ла инде..."**

1582218 91006

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 3 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4717
Заказ 3037